✓ *Бәхетһеҙҙәр һәм насар йоҡлаусылар, ғәҙәттә, был сифаттары менән ғорурланырға ярата.*

*(Бертран Рассел).*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

23 - 29 ОКТЯБРЬ (ҠАРАСАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru 2002 йылдан башлап сыға Һатыуҙа хаҡы иреклe №43 (409)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Йөрәгеңдән үткәргән...**

әйтер һүҙең булыуы шарт



2

**Аҡыллы ҡатын-ҡыҙҙар...**

шашкала ярыша



4

**Унын йәшәү рәүеше -**

бирешмәҫ рух, ныҡлы тәүәкәллек өлгөһө



9

**Мөжәүир хәҙрәт -**

башҡорттоң бөйөк әүлиәһе



13

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# БЕҘ ҮҘЕБЕҘ - БАШҠОРТТАР,

## ти Борай, Илештә тыуып-үҫкән ошо егеттәр

*Рудоль ӘҮСӘХОВ, архитектор, Рәсәй Архитекторҙар академияһы кәңәшсеһе, Илеш башҡорто:*

- Көньяҡ-көнсығыш башҡорттары беҙҙең - илештәрҙең башҡортлоғона һәр ваҡыт көләмһерәберәк ҡараны һәм ҡарай. Улар был осраҡта иң тәүҙә тел айырымлығын төп фактор итеп ала. Миңә лә шулай әйткәндәре бар. Мин ундайҙарға: "Кемебеҙ күберәк башҡорт икән, әйҙә, башҡорт халҡының тарихын ниндәй кимәлдә белеүебеҙ менән, һис юғы, ҡурай уйнап ярышып ҡарайыҡ", - тием. Уларға ҡурайҙа уйнап күрһәтһәм, аптырайҙар. Бына шулай, Илеш, ғөмүмән, көнбайыш башҡорттарының үҙ асылынан ситләшеүенең төп сәбәптәренең береһе - әҙәби телдә һөйләшеүсе башҡорттар тарафынан үҙенеке итеп ҡабул ителмәүе лә.

Мин Илеш районының Яңы Күктау ауылында тыуып үҫтем. Бала сағымдан уҡ атайымдан үҙемдең башҡорт икәнлегемде бик яҡшы белдем. Үҫә биргәс, Ерҙең түңәрәк икәнлегенә, унда башҡа милләттәрҙең дә барлығына төшөндөм. Үҙемдең башҡортлоғомда мин ғаиләбеҙҙә саҡта шикләнмәнем, шиктәрем ҡайһы бер ауылдаштарҙың: "Беҙ - татарҙар, сөнки татарса һөйләшәбеҙ",- тигәне менән осрашҡас барлыҡҡа килде. Шикләнгән-икеләнгәндәр бөгөн дә күп. Мәктәпкә уҡырға барғас, шиктәрем тағы ла көсәйҙе. Сөнки беҙгә Һаҙи Таҡташты, Ғабдулла Туҡайҙы уҡыта инеләр, башҡорт шағирҙарын белмәнек. Беҙҙең телмәрҙәге башҡорт һүҙҙәрен, өндәрен уҡытыусыларыбыҙ "хата" тип төҙәтә килде. "Һин улай тип әйтеп, культуралы һөйләмәйһең, бына китаптарҙа нисек яҙылған, шулай уҡыһаң, культуралы була", тип аңлаттылар. Уҡытыусыларыбыҙға рәхмәтем ҙур, уларҙы ғәйепләп әйтеүем түгел. Улар ҙа ҡушҡанды эшләгәндер инде. Шулай итеп, беҙҙең яҡ башҡорттарының ҡанында булған башҡортлоҡтоң сабый саҡтарынан алып аҫҡы андан өҫкө аңға сығыр юлы башҡа төрлө ҡараштар менән бикләнә килде. Илеш башҡорттарының төп драмаһы бына ошонда. Шундай урынлы һорауҙар тыуа: беренсенән, беҙҙең төбәк башҡорттарының үҙ милли асылынан ситләшкән совет осоронда етәкселәр ни ҡараған? Икенсенән, был кемдер тарафынан ойошторолған сәйәсәт икән, ниңә ул һаман да фашланмай? Өсөнсөнән, был хәлгә беҙ нисек битараф ҡарай алабыҙ? Нимә генә тимә, үҙ республикаһында йәшәүсе республикаға исем биреүсе милләт вәкилдәренә ҡарата үткәрелгән быңдай сәйәсәт ҡасан да булһа бер тапҡыр үҙ исеме менән аталып әйтелергә тейештер. Мин Татарстандың Аҡтаныш, Минзәлә яҡтарына балыҡҡа йөрөйөм, йыш ҡына урындағы халыҡ менән аралашырға тура килә. Уларҙың телендәге башҡорт тамыры Илеш башҡорттарына ҡарағанда ла күберәк һаҡланып ҡалғанын күреп аптырайым...

*Людвиг ШАБАНОВ, Борай башҡорто (көнбайыш башҡорттары диалектында):*

- Ә.З. Әсфәндияровның "История сел и деревень Башкортостана" һәм "Западные башкиры" китапларында безнең Борай, Тәтешле, Яңаулыл районнарына арналған үтә дә ҡиммәтле мәғлүмәтләр күп. Мәсәлән, үземнең ике вариантлы шәжәрәмне таптым шунда. Шунысы аянычлы, Октябрь революциясына ҡәдәр истә дә булмаған, башҡа сыймаған ассимиляция бәләсе килеп туды хәзер башҡорт халҡына. Борайда хәзер татарча "белмисез, килмисез" дип кенә сөйләшә башладылар.

Әйтергә кирәк, илленче елларда Борайда үзебезнең диалект хужа иде. Шушыңа бәйле, балачаҡ хәтирәләрем истә ҡалған. Безнең бик тә абруйлы, өлкән йәштәге, бик талапчан рус теле уҡытучысы Килмәтов Фаяз абый бар иде. Хәзер мәрхүм инде, урыны ожмахта булсын. Бер көн класҡа килеп кереп, портфелен өстәлгә ҡуйды да, безгә диҡҡәт белән ҡарап чыҡҡас: "Балалар, Борайлар башҡортлар алар",- тип әйтеп ҡуйды. Бу фекерен ул дауам итмәде, дәрес башланды. Ләкин аның әйткәне әле дә истә, күз алдымда. Бәлки, ул елларда шушындай фекер әйтү үзе генә дә тормошта ҡатмарлыҡлар китереп тудырырлыҡ булғандыр. Бәлки, шушы сүзләрне безгә еткереп, башҡорт булараҡ, үзенең гражданлыҡ бурычын берниҡәдәр үтәгәндер.

Зур энциклопедик словарда әйтелгәнчә, ассимиляция ике төрлө була: тәбиғи, яки ҡатнаш никахлар, һәм мәжбүри, яки көч ҡулланып. Безнең очраҡта аның икесе дә урын тапҡан. Мәжбүри дигәнен ачыҡлау кирәк.

Батша хөкүмәте чоронда 360 йыл дәүерендә асабалығын саҡлап алып ҡалған халыҡның жиргә хоҡуғы большевикларның бер указы белән юҡҡа чығарыла. Билдәле грек мифындағы Антей кебек, жиренән аерылғач, халыҡ тәмам көчсөзләнә. Өстәүенә, совет власы башҡорт жирләрен Пермь, Чиләбе, Курган, Свердловск, Ырымбур өлкәләренә һәм Татарстанға кисеп-кисеп өләшә. "Бүлгәлә һәм хакимлыҡ ит" девизы тулысынча тормошҡа ашырыла.

Тарихның төрле чорларында, күберәге крепостнойлыҡтан һәм чуҡындырудан ҡачып, Башҡортостанға төрлө яҡтан халыҡлар ағыла башлый. Шул исәптән татарлар да килә. Боздә ошай икән - йәшәй бирсеннәр, рәхәт донья көтсеннәр. Тик ҡайбер татар зыялылары ғына Башҡортостанны үтә дә "ярата", алар, хәлләренән килсә, әле дә безнең төньяҡ-көнбайышны Минзәләгә, Бөгөлмәгә ҡушып ҡына ҡуярлар иде. Мына шулай башҡорт халҡының язмышына төшкән афатны үз мәнфәғәтенә ярашлы ҡулланырға тырышалар. Әйтергә кирәк, алар Мәскәүдә дә житәрлек. Йыш ҡына ишетергә туры килә: "Татар һәм башҡорт халҡы туғандашлар, алар бер ҡошноң ике ҡанаты..." дигән сүзләрне. Әммә бәйғәмбәребез Мөхәммәт с.ғ.с. әйтеп ҡалдырған бит: "Дусың белән артыҡ дус булма - дошманлашып китеүең бар, дошманың белән артыҡ нык дошман булма - артыҡ дуслашып китеүең бар", - дип. Бәйғәмбәребез генә түгел, башҡа аҡыл ияләре дә ис киткеч аҡыллы сүзләрне безгә мирас итеп ҡалдырған. Мәсәлән, билдәле этнограф Л.Н. Гумилев халыҡларның бергә йәшәү рәүешен болай ди: "Жить надо дружно, но врозь". Рус халҡында да шундый мәкәл бар: "Дружба дружбой - табачок врозь"...

ИҒТИБАР!

✓ ***Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! 2011 йылдың беренсе ярты йыллығы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып ҡалығыҙ, тип саҡырабыҙ һеҙҙе. 50665 индекслы "Киске Өфө" алты айға 330 һум 24 тин, 50673 индекслыһы (предприятие һәм ойошмалар өсөн) - 360 һум 24 тин тора. Бергә булайыҡ, бергә уйлайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!***



МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ

**Ошо көндәрҙә йыл да ҡабатлана торған матур тантаналарҙың береһе - журналистика өлкәһендәге быйылғы лауреаттарға Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы тапшырыу сараһы булып үтте. Унда БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбасары Зөһрә Рәхмәтуллина, БР Элемтә һәм матбуғат министры Борис Мелкоедов, Күгәрсен районы хакимиәте башлығы Фәрит Мусин ҡатнашты.**

# ЙӨРӘГЕҢДӘН ҮТКӘРГӘН...

## әйтер һүҙең булыуы шарт

Был сара республика кимәлендәге башҡа премиялар тапшырыу тантаналарынан айырыла: ул, берҙән, Шәһит Хоҙайбирҙиндең тыуған яҡтарында -Күгәрсен районының Хоҙайбирҙә ауылында үтә. Икенсенән, унда Хөкүмәт вәкилдәре, комиссия ағзалары ғына түгел, ә бар район ауылдарынан вәкилдәр йыйыла. Өсөнсөнән, район таланттары лауреаттар өсөн махсус рәүештә матур концерт күрһәтә, йыйылған халыҡтың уларға алҡыштары лауреаттарға алҡыш булып та яңғырай. Шулай уҡ лауреаттар Хоҙайбирҙә ауылы мәҙәниәт йорто алдындағы парҡка үҙ ағастарын ултырта, Ш. Хоҙайбирҙинға арналған музейҙағы кенәгәлә иҫтәлекле яҙыуҙар ҡалдыра. Бына шундай тулы программалы етди, тарихи бер сараға әйләндерә күгәрсендәр журналистарға яҡташтары исемендәге премияны тапшырыу тантанаһын. Әйткәндәй, мәҙәниәт өлкәһендә бер юлы ике премия булдырған район республикала берҙән-бер генә. Күгәрсен районының тағы ла Зәйнәб Биишева исемендәге премияһы ла бар. Афарин, тиергә генә ҡала бынын өсөн күгәрсендәргә. Улар бер ыңғайҙан үҙҙәренең бөйөк шәхестәрен ҙурлай, хөрмәтләй, улар тураһындағы яҡты иҫтәлектәрҙе, хәтерҙе яңырта. Икенсенән, бөтөн башҡа һөнәр эйәләрен ҙурлап, юғары күтәреп йөшәгән, әммә йыш ҡына үҙҙәре ситтәрәк ҡалыусы һөнәр кешеләрен - яҙыусылар һәм журналистарҙың хеҙмәтенә баһа бирә, шулай уҡ ҙурлау, хөрмәт билдәһе күрһәтә.

Эйе, республика журналистарын дәртләндерә торған берҙән-бер премия ул Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы. Ул йыл да өс кешегә генә бирелә. Премияның күләме лә ҙур түгел - 30 мең һум. Әммә берҙән-бер премия булараҡ, уның исеме ҙур, журналистар уны ғорур йөрөтә. "Киске Өфө" гәзите сыға башлағаны бирле, һигеҙ йыл эсендә, ике журналисыбыҙ - Әхмәр Үтәбай менән Таһир Ишкинин ошо йәш баҫмабыҙҙағы үҙенсәлекле ижады, яңғырашлы һәм тос һүҙе өсөн Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге премияға лайыҡ булды. Уларҙың публицист һүҙен уҡыусыларыбыҙ яҡшы белә һәм ярата.

Әхмәр Үтәбай гәзит сыға башлағандан алып тиерлек уникаль "Диалог", "Монолог" рубрикаларын алып бара. Уларҙа ул зыялылар теле менән башҡорт халҡының милли идеяһы нисек булырға тейешлеген әйттерҙе, тарихыбыҙҙың иң хәҡиҡәти биттәренә сәйәхәт яһаны, халҡыбыҙҙың рухын, аңын нисегерәк итеп ҡуҙғытыу, уятыу юлдарын барланы. Шундай глобаль мәсьәләләр күтәргән диалогтар, түңәрәк ҡорҙарҙы Әхмәр Ғүмәр улы кеүек итеп ҡора алған башҡа журналисты белмәйем республикала. Тимәк, ул ысын мәғәнәһендә лайыҡлы был премияға.

Таһир Ишкинин иһә шулай уҡ берҙән-бер тиерлек аналитик-публицист беҙҙең матбуғат баҫмалары яланында. Илдә барған теләһә ниндәй ваҡиғаны еңелсә юмор менән үтемле лә, аңлайышлы ла итеп анализлап, "сәйнәп ҡаптыра" белә ул. Уҡыусыларыбыҙ шулай ти уның тураһында: "Рәсәйҙә булған ул сәйәси ваҡиғаларҙы телевизорҙан ҡарап, гәзиттән уҡып, радионан ишетеп бөтәбеҙ, ләкин шул уҡ ваҡытта ул ваҡиғаларға ҡарата Таһир Ишкинин ниндәй баһа бирер икән, тип, "Киске Өфө"нөң килеһе һанын түҙемһеҙләнеп көтәбеҙ. Сөнки был журналист ваҡиғаларҙы башҡорт кешеһе нисек аңларға тейеш булһа, шулай аңлатып бирә...". Тимәк, Таһир Ишкинин ысын мәғәнәһендә лайыҡлы был премияға.

Ғөмүмән, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы тураһындағы положениела ла яҙылған был талаптар: премияға дәғүә итеүсенең журналистикала үҙ һүҙе, үҙ жанры, үҙ юлы булырға тейеш. Ошо талапҡа яуап биреүселәр күп түгел беҙҙә, әммә барҙар һәм улар был премияны ала тора, аласаҡтар. Әммә... Йыш ҡына редакцияларҙа эшләп, көндәлек гәзит йә журнал, радио йә телевидение хәбәрсеһе эшен башҡарып, теге йәки был ваҡиға тураһында мәғлүмәт еткереп кенә йөрөгән хеҙмәткәрҙәр ҙә үҙен журналист тип иҫәпләй башлай. Улар үҙҙәренең ҡәҙимге хеҙмәткәр генә икәнен танымайынса, ошо премияға дәғүәләшергә батырсылыҡ итә хатта (Хөкүмәт премияһы буйынса комиссия ағзаһы булараҡ, йыл да был хәлдең шаһиты булырға тура килә). Ә бит бөтөн ғүмерен Башҡортостан Республикаһы булһын, йәшәһен тигән көрәшкә арнаған оло шәхесебеҙ исемендәге премияға һәм журналист тигән исемгә лайыҡ булыу өсөн үҙ республикаңдың һәм һөнәреңдең ысын патриоты ла булырға, Ижад тигән үргә ныҡышмалы артылырға, ошо юлда үҙ йүнәлешеңде, үҙ маҡсатыңды, үҙ һүҙеңде табырға тейешһең. Уны йә табып була, йә юҡ. Ғүмер буйы редакцияла эшләп тә, мәғлүмәт йыйыуға хеҙмәткәр кимәлендә генә ҡалғандар ҙа була ул (ә ысын журналист мәғлүмәтте анализлай, һығымталар яһай, уларҙы башҡалары менән сағыштыра һ.б.). Шулай уҡ әле генә гәзит-журналдарға эшкә килеп, үҙен журналист тип атай башлау күренеше лә таралып китте хәҙер. Ун һигеҙ йәштә шәп шиғыр яҙған кешене шағир тип атап була, ә бына был йәштә шәп мәҡәлә яҙып, журналист тип аталыр кешене көндөҙ сыра яндырып эҙләһәң дә табып булмаясаҡ. Уның өсөн ваҡыт үтеүе кәрәк. Уның өсөн һинең башҡаларға китаптарҙан уҡып, теленә күсергән түгел, ә тормош тәжрибәһе туплап, аҙмы-күпме түл йыйып, йөрәгең һеңдергән үҙеңдең әйтер һүҙең булыуы шарт.

**Әйткәндәй, был юлы Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге премияны алыусыларҙың икеүһе - йәш кешеләр. Уларҙың береһе, Азат Ярмуллин, һөнәре буйынса тарихсы. Ул бына ун йылдан ашыу гәзит-журналдарҙа тарихи темаға материалдар баҫтыра. "Киске Өфө"лә ул һуңғы ваҡытта "Улар автономия яуланы" тигән рубриканы алып бара. Башҡортостан автономияһының ниндәй ауырлыҡ менән яуланыуы, ошо юлда йөнен аямай көрәшкән милли хәрәкәт етәксеһе Әхмәтзәки Вәлиди һәм уның арҡадаштары, данлыҡлы көрәшселәр, батырҙар тураһында күп нәмә белде уҡыусыларыбыҙ уның был мәҡәләләре аша.**

**Икенсе лауреат - Мәләүез районының "Көнгәк" гәзите журналисы Лена Абдрахманова. Ул әхлаҡ, тәрбиә темаларына яҙған мәҡәләләре менән район уҡыусылары араһында танылыу яулағайны инде. Быйыл ул йыл дауамында "Нисек йәшәйһең, башҡорт ауылы?" тигән рубрика асып, районның 34 ауылына сәйәхәт ҡыла. Автор был ауылдарҙың үткәне, бөгөнгөһө, киләсәгенә байҡау яһай, ауылдың иң кесеһе һәм абруйлы аҡһаҡалы, ағинәйҙәрен исемләй, уңыш-еңеүҙәре, шатлыҡ-ҡыуаныстары, проблемаларын асып һала. Ысынлап та, бик ҡыҙыҡлы проектты тормошҡа ашырҙы журналист һәм уның был хеҙмәте Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге премия менән баһаланды. Лайыҡлы баһа. Был ысын журналист исеменә лайыҡтар республика кимәлендәге генә түгел, район кимәлендәге матбуғат баҫмаларында ла бар, тигәнде раҫлаусы миҫал беҙҙә лә ҡыуандыра. Бына шулай, лайыҡлыларҙың лайыҡлы баһаланыуына шаһит булып йәшәйек.**

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**



## Н И М Ә ? ҠАЙҘА ? ҠАСАН ?

✓БР Президенты республика Хөкүмәтенә йылғаларҙа һыу кимәленең ҡырҡа кәмеүе эҙемтәләрен бөтөрөү буйынса программа эшләргә ҡушты. Хөкүмәттә был мәсьәләләрҙе хәл итеү менән шөғөлләнәсәк комиссия төҙөлдө. Президент ҡалаларҙы һәм ауылдарҙы һыу менән тәьмин итеүсе өҫтәмә скважиналарҙы ябып, һыуҙы һаҡсыл тотоноу режимын индерергә ҡушты.

✓БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты Нәжиб Йәмилевтың Башҡортостанды Мәскәү ваҡытына күсереү буйынса закон проекты әҙерләүе тураһындағы хәбәр ошо арала иң әүҙем тикшерелгән мәсьәләләрҙең береһе булды. Был фекергә ҡаршы сығыусы күпселек араһында Башҡортостан Президенты ла бар. Уның фекеренсә, Башҡортостандың Мәскәү ваҡытына күсеүе тураһында бөтә хәбәрҙәр - депутаттарҙың береһенең генә шәхси фекере. Мәскәү ваҡытына күсеү маҡсатҡа ярашһыҙ. Беҙ дөрөҫ географик һәм биологик ваҡыт буйынса йәшәйбеҙ.

✓БР Президенты бойороғо менән республикала һунар миҙгеле асылды һәм һунар ресурстарын аулауға лимит һәм квоталар билдәләнде.

✓БР Хөкүмәтендәге ведомство-ара кәңәшмәлә яңы ойошторолған "Ирәмәл" тәбиғәт паркы" дәүләт учреждениеһын финанслау мәсьәләһе ҡаралды. БР Тәбиғәтте файҙаланыу һәм экология министрлығы тәҡдим иткән сметаға ярашлы, дәүләт учреждениеһы штатында ун инспектор буласаҡ. Дөйөм майҙаны 49, 338 мең гектар тәшкил итәсәк тәбиғәт паркы биләмәһен ҡүҙәтеү өсөн улар сифатлы автотранспорт, ҡарйөрөгөстәр һәм аттар менән тәьмин ителәсәк. Хөкүмәттә был дәүләт учреждениеһын ойоштороу менән бер уҡ ваҡытта Ирәмәл тауы урынлашҡан Учалы һәм Белорет райондары муниципалитеттарына автотранспорт, туристик, ҡунаҡхана хеҙмәттәре күрһәтеүсе бәләкәй предприятиелар селтәрен үҫтереү хаҡында ла уйларға кәрәк, тигән фекер белдерелде.

✓Ошо көндәрҙә Өфө-Нефтекама маршруты буйынса тәүге техник авиарейс тормошҡа ашырылды. Самолет 200 км-ҙан ашыу араны 35 минутта үтте. Киләсәктә һауа транспорты тимер юл һәм автомобиль транспортына етди конкурент була аласаҡ. Тиҫтә йыл элек кенә республикала 188 осоу-ултырыу майҙансығы һәм 30 аэродром бар ине. Әле Сибай һәм Нефтекама аэропорттары тергеҙелде. Сиратта - Белорет, Стәрлетамаҡ, Октябрский, тиҙәр "Өфө" халыҡ-ара аэропорты етәкселәре.

✓ *Башҡортостандан ситкә "ҡара көс" кенә түгел, ә белемле, талантлы кешеләр китә. Бер арҙаҡлы ҡурайсы бөгөн үҙебеҙҙә түгел, сит ерҙәрҙә ғүмер итә икән. Батша заманында башҡорт һөрөлгән ерҙә ижад итә ул.*



АҘНА ШАҘДАУЫ

# СИҒАНДАР, ВЬЕТНАМДАР...

## һәм саҡ ҡына башҡа милләттәр тураһында

**Йәмәғәт, ҡайҙа нисектер, әммә Францияла сиғандарҙы ҡыуалар. Бына таптың яңылыҡ, тиерһегеҙ, моғайын. Бер бөгөн ҡыумайҙар ҙа баһа. Әлбиттә. Бер нисә ай буйына. Бар донъяға тауыш күтәреп, гөрләшеп ҡыуалар уларҙы. Европа Союзына ингән дәүләттәр шаулаша. Франция президенты Николя Саркози Евросоюз граждандары алдында абруйын юғалтып бара. Телеэкрандарҙан ҡырынмаған сиған ирҙәренең һәм иламһыраған сиған ҡатындарының йөҙҙәрен, сиған балаларының аптыраулы ҡараштарын күрһәтәләр. Француздарҙы расизмда ғәйепләйҙәр. Шау-шыу, ҡаңғырыҡ. Гүйә, Европа халҡының башҡа эше лә, проблемалары ла юҡ.**

Рәсәй халҡы быға бер ҙә аптырамай. Беҙҙең илдә ғүмер буйы кемде булһа ла, ҡайҙа булһа ла ҡыуҙылар, ҡыуалар һәм, күрәһең, ҡыуасаҡтар әле. Башҡорттарҙы батша заманынан бирле Себергә лә ҡыуҙылар, Балтик диңгеҙе буйына ла. Уралдың теге яғында, көнсығышта башҡорт һөйәге ятмаған урын да ҡалмағандыр. Хәйер, Уралдың был яғында ла шул уҡ хәл. Ҡаҙан һәм Минзәлә, Мәскәү һәм Петербург, Бородино яланы, Березина һәм Париж...

Сталин, ана, әллә күпме халыҡты ил буйлап тегеләй-былай ҡыуҙы ғына. Чечендарҙы, ингуштарҙы, Иҙел буйы немецтарын, Ҡырым татарҙарын - Ҡаҙағстанға, украиндарҙы, латыш, литва, эстондарҙы - Себергә, йәһүдтәрҙе - Алыҫ Көнсығышҡа, башҡорттарҙы - Черемховоға. Унан һуң Хрущев, сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе күтәреү сәбәбе менән, бар халыҡты Ҡаҙағстанға һөрҙө. Брежнев, Бөтә Союз комсомол төҙөлөштәре уңайы менән, йәштәрҙе Алыҫ Көнсығышҡа олаҡтырҙы.

Сиғандарҙы ғына Рәсәй буйлап бер кем дә ҡыуғаны юҡ әле. Әлеге лә баяғы Иосиф Виссарионович уларҙы ултыраҡ тормошҡа күсерергә теләп, сиған колхоздары ойоштороп, сиған мәктәптәре асып маташҡайны. Сиған республикаһы ла булдырыр ине әле. Магадан тирәһендә, йәки Воркутала. Ваҡыты етмәнеме "бөйөк етәксе"нең, әллә башҡа берәй эше табылып, был йыраусы һәм бейеүсе халыҡты оноттомо - быныһы хәҙер билдәһеҙ.

Сиғандарҙан әҙерәк ситләшәйек. Европалағы милләттәр мәсьәләһенә туҡталып үтәйек. Халыҡтарҙы болғапмы болғаған, бар донъяны аҫтын-өҫкә әйләндергән Икенсе бөтә донъя һуғышынан һуң Европа милли аҙсылыҡтарға, айырыуса, башҡа дәүләттәрҙән күсеп килеүселәргә ихлас ҡараштa була. Емереклектә ятҡан иҡтисадты күтәрергә кәрәк ине бит. Империялар емерелеп, Африкалағы, Һиндостандағы, Азиялағы колониялар азатлыҡ яулағас, Европа илдәренә эмигранттар ағымы ябырыла. Францияға - Алжирҙан, Тунистан, Марокконан, Бөйөк Британияға - Һиндостандан, Кениянан, Уганданан, Сомалиҙан, Испанияға - төньяҡ Африка дәүләттәренән. Көнбайыш Германия хөкүмәте иһә махсус рәүештә Төркиәнән арзан эш көсөн, йәғни, кешесә әйткәндә, немецтар эшләргә риза булмаған өлкәләрҙә ҡулланыр өсөн тамаҡ хаҡына теләһә ниндәй ауыр эшкә әҙер торған төрөк ярлы-ябағаһын күпләп индерә. Иҫәп тиҫтәләгән мең кеше тураһында бара. Европа халыҡтары ситтән килеүселәрҙең эске тормошона ҡыҫылып бармай. Улар бит ҡара эшселәр. Ҡара көс. Эмигранттар ҙа европалашырға ашыҡмай. Улар эшсе ятаҡтарында бергәләшеп йәшәй, үҙ телдәрендә һөйләшә, үҙ динен тота, йолаларын теүәл үтәй. Һәм күпләп бала таба. Үрсей. Ислам дине шулай ҡуша. Күсеп килеүселәр үҙ илдәренә ҡайтырға ашыҡмай. Европала тормош туҡ, өҫ бөтөн. Урындағы халыҡ (милләтселәрҙең сығыштарын иҫәпкә алмағанда, әлбиттә) килмешәктәргә тыныс, хатта битараф ҡарай. Францияла, мәҫәлән, "милләт" төшөнсәһе "гражданлыҡ" төшөнсәһе менән алмаштырылған. Франция гражданины статусына эйә булғандар бөтәһе лә француздар - ҡара тәнлеме ул, ҡыҫыҡ күҙлеме, түбәтәй кейеп йөрөймө, әллә салма ураймы. Толерантлыҡ идеялары солғап ала Европаны. 1995 йылда хатта ЮНЕСКО тарафынан Толерантлыҡ принциптары декларацияһы ҡабул ителә. Мәғәнәһеме? Бик ябай - кеше күп төрлө, ул аҡ, ҡара, һары, ҡыҙыл тәнле булыуы мөмкин, төрлө телдә һөйләшеүе, төрлө дин тотоуы, төрлө аллаға ышаныуы ихтимал - был уның хоҡуғы. Уны ихтирам итергә кәрәк. Европалылар толерантлы (йәғни, түҙемле) булырға тырыша. Ә килмешәктәр ошо принципҡа арҡаланып, Европа буйлап мәсеттәр күтәрә. Кисәге эмигранттар бөгөн баш ҡалҡыта башлай.

Европаға ни эшләргә был шарттарҙа? Тәбиғи, урындағы халыҡ (уларҙы шартлы рәүештә аҡ тәнлеләр тип атарға ла мөмкиндер) тик ятмай, партияларға, берләшмәләргә ойоша, килмешәктәрҙең хоҡуҡтарын сикләгән закондар ҡабул итеүҙе талап итә, үҙ вәкилдәрен парламентҡа үткәрергә тырыша. Йәштәр иһә ҡатыраҡ ҡылана - төркөмдәргә тупланып, "ҡара"ларҙы туҡмай, үлтерә башлай. Ваҡытлы матбуғат саралары, сәйәсмәндәр, күҙәтеүселәр Европаның киләсәген ҡара төҫтәрҙә фаразлай. Ҡара Европа, тимәк. Йәғни, бер нисә тиҫтә йылдан аҡ тәнле европалылар үҙ илдәрендә милли аҙсылыҡта ҡаласаҡ. Бының менән мотлаҡ көрәшергә кәрәк. Ике вариант бар. Беренсеһе - күберәк бала табырға. Икенсеһе иһә - ҡара тәнлеләрҙе ҡыуып сығарырға. Ҡайһыныһы анһатыраҡ? Ә? Шулай шул. Ә толерантлыҡ? Был шарттарҙа уны ситкәрәк ҡуйып торорға ла булалыр.

Тап ошо ваҡытта Францияға сиғандар килеп тула. Ҡайҙан тиһегеҙме? Европа Союзына ингән башҡа илдәрҙән - Румыниянан, Болгариянан. Эйе, улар ҙа Евросоюз ағзалары, әммә ундағы тормош кимәлен Франциялағы менән бер нисек тә сағыштырып булмай. Балыҡ тәрәнгә, ә кеше ҡайҙа ынтыла? Дөрөҫ! Сиғандар бөгөн - Көнбайыш илдәрендә йәшәүселәр тарафынан ҡабул ителгән берҙән-бер принципты - (Тыуған ил тигән төшөнсә - миф. Кеше яҡшы шарттарҙа йәшәргә тейеш!) тормошҡа ашырырға маташа. Әммә Европа уларға быны эшләргә бирмәй.

Әйтергә кәрәк, минең дә килмешәк халыҡ менән бергә йәшәп ҡарау тәжрибәһе бар. Бер йыл эсендә башымдағы толерантлыҡ хаҡындағы фекерҙәрем шунда уҡ ҡайҙалыр осоп юҡҡа сыҡты. Аңлағанһығыҙҙыр, һүҙ вьетнамдар тураһында. Бер мәл Өфөнөң Дим районын халыҡ "башҡорт Ханойы" тип атаны. Дим тимер юлы станцияһы эргәһендәге келәттәрҙә ойошторолған сауҙа үҙәге "Вьетнам баҙары"на әүерелде. Был халыҡ вәкилдәре бөтә Димде тиерлек ысын мәғәнәһендә баҫып алды. Мин йәшәгән күп ҡатлы йорттоң һәр бер подъезында тиҫтәләгән вьетнам ғаиләһе йәшәне. Улар бында бала тапты. Быны ҡала гәзиттәренең береһендә аҙна һайын донъя күргән "Үткән аҙнала тыуған балалар исемлеге"ндә асыҡтан-асыҡ күрергә була ине. Ете йәштәре тулғас, вьетнам балаларын мәктәпкә ҡабул иттеләр. Был закон, бала белем алырға тейеш. Әммә вьетнамдарҙың оло йәштәгеләре лә, бала-сағалары ла урындағы халыҡ менән бергә йәшәргә теләк белдермәне. Улар рус телен өйрәнмәне. Үҙ-ара тик вьетнамса ғына аралашты. Һатып алыусылар менән иһә урындағы халыҡ араһынан ялланған һатыусылар һөйләшеп килеште. Улар күп кенә ине. Һуңынан белдем, рәсми мәғлүмәттәргә ҡарағанда Башҡортостанда дүрт меңләп вьетнам йәшәгән икән.

Әммә берҙән-бер көндө ҡапыл ғына, аҙна-ун көн эсендә юҡҡа сыҡты улар. Вьетнам баҙарында ул саҡта ғүмерҙә күрелмәгән сауҙа ойошторолдо. Өфөнөң ярты халҡы тиерлек Дим районында булды. Вьетнам баҙарын ОМОН менән тиерлек һаҡланылар. Рәсми версияға ярашлы, Димдә йәшәүсе вьетнамдарҙың визалары ябылған булған. Ваҡыт үтеү сәбәпле, тинеләр. Халыҡ араһында иһә вьетнамдарҙы ҡыуыу сәбәбе иҡтисади өлкәлә, улар кемдеңдер юлына арҡыры сыҡҡан, кемдеңдер буласаҡ табышына ҡул һуҙған, тигән хәбәр ҙә таралды. Сифаты самалы булһа ла, тауарҙарының хаҡтары арзан ине бит. Эйе, йәмәғәт, беҙ бөтәбеҙ ҙә интернационализм рухында тәрбиәләнгәнбеҙ. Әммә вьетнамдар ҡайтып киткәс, Дим халҡы барыбер еңелерәк һулап ҡуйҙы.

Әле Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу бара. Хәйбулланан, Баймаҡтан, башҡа райондарҙан иҫәп алыусыларҙың эше тураһында репортаждар бирәләр. Иғтибар иткәнһегеҙҙер әле. Ауылдарҙа күп кенә йорттар ябыҡ, тиҙәр. Хужалары ситтә. Ҡайҙамы? Кем ҡайҙа. Ир-егеттәр Себерҙә, Төмән өлкәһендә, Ханты-Манси һәм Ямал-Ненец автономия округтарында. Былары иң тәүәккәлдәре. Башҡалары Магнитогорскиҙа, Өфөлә, Силәбелә, йәғни яҡын-тирәләге эре ҡалаларҙа. Ҡайһы берәүҙәр хатта Мәскәү тирәһенә юллана. Йәнәһе, унда аҡса күберәк. Унда бай кешеләр бар. Уларға йорт төҙөргә, кирбес һалырға, соҡор ҡаҙырға эш ҡулдары кәрәк. Ҡара көс, тимәк. Ҡатын-ҡыҙҙар иһә - Италияла. Башҡорттар ғына йөрөмәй шулайтып донъя ҡыҙырып аҡса артынан. Тәүҙә үзбәктәр, тажиктар килде Рәсәйгә. Бөгөн, мәҫәлән, Мәскәүҙә һәм Санкт-Петербургта урындағы халыҡ урам һепермәй, имеш. Бары тик Урта Азия халыҡтары вәкилдәре генә. Ә молдавандар һәм украиндар кирбес һала, штукатурлай. Күрәһең, башҡорт егеттәре бура күтәрәләр?

Европа илдәре менән уртаҡлыҡты һиҙәһегеҙме? Тик унда Германияға, Францияға, Италияға һәм башҡа дәүләттәргә уларҙың элекке колонияларынан ҡара көс ағылғайны. Ә беҙҙә? Әллә беҙ һаман да Мәскәүҙең колонияларымы? Үзбәкстан, Тажикстан, Башҡортостан...

Әйтергә кәрәк, Башҡортостандан ситкә "ҡара көс" кенә түгел, ә белемле, уҡымышлы, абруйлы, талантлы кешеләр китә. Баймаҡ районында ғына түгел, Башҡортостанда киң танылған бер ғаиләнең күренекле вәкиле, арҙаҡлы ҡурайсы бөгөн үҙебеҙҙә түгел, сит ерҙәрҙә ғүмер итә икән. Батша заманында башҡорт һөрөлгән ерҙә ижад итә ул. Ә ундайҙар берәү-икәү генә түгел. Тиҫтәләгән, йөҙләгән, меңләгән. Быны ғәләмәт! Француздар - сиғандарҙы, урыҫтар вьетнамдарҙы ҡыуып сығарған кеүек, бер саҡ башҡорттар ҙа үҙ илдәренә ситтән ҡыуылып ҡына ҡайтыр микән?



**Таһир ИШКИНИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Республикаһында байрам көндәре булыу менән бәйле 4,5,6,7 һәм 16 ноябрь ял көндәре булып тора.

✓Йәрмәкәй район хакимиәте башлығы вазифаһын контракт буйынса Ғафуан Шәйхетдинов башҡарасаҡ. Ғафури районында ла хакимиәт башлығы вазифаһын биләүгә конкурс иғлан ителде һәм етәксе тәғәйенләгәнгә тиклем был вазифаны ваҡытлыса Әнүәр Муллағолов башҡара.

✓Өфөлә "Волга-Урал төбәгендә Ислам цивилизацияһы" тип аталған Халыҡ-ара симпозиум булып үтте. Унда 18 дәүләттән делегация ҡатнашты. Сараны ойоштороуҙа Ислам конференцияһы Ойошмаһы ҙур әүҙемлек күрһәтте. Ойошманың Генераль сәркәтибе үҙе лә килгәйне.

✓Республика ауылдары мәктәптәре ошо арала база мәктәптәренә йөрөтөү өсөн тағы ла 56 автобус аласаҡ. Улар өсөн республика бюджетынан 56,5 млн һум аҡса бүленгән. "Мәктәп автобусы" федераль программаһы 2006-2008 йылдарға ғына иҫәпләнгәйне һәм ошо осорҙа республика мәктәптәренә 451 автобус бүленгәйне. Автобустар менән тәьмин итеүҙе артабан республика үҙе ойоштора башланы.

✓Башҡортостанға эш сәфәре менән Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Бала хоҡуҡтары буйынса вәкил Павел Астахов килде. Ул республика етәкселәре менән осрашҡандан һуң Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге 1-се башҡорт республика балалар йортонда булды, етем һәм ҡараусыһыҙ ҡалған балаларҙың йәшәү шарттары менән танышты, балалар менән осрашып, уларҙың ҡурайҙа, ҡумыҙҙа уйнауҙары менән һоҡланды. Павел Астаховты 2-се махсус (коррекцион) балалар йортонда ла көтөп алдылар. Унда 3-7 йәштәрҙәге 63 инвалид бала йәшәй. 16-һы патронат тәрбиәгә алынған. Вәкил шулай уҡ Республика балалар клиник дауаханаһында ла булды.

✓2013 йылға тиклем иҫәпләнгән "Балалар баҡсаһы" республика программаһы буйынса мәктәпкәсә балалар учреждениелары төҙөүгә Башҡортостан бюджетынан 9,5 млрд һум аҡса бүлеү ҡаралған. 2011 йылға бындай төҙөлөштәр өсөн 2,5 млрд һум бүлеү планлаштырыла. Әле Башҡортостанда барлығы 50 мең балаға балалар баҡсаһында урын етешмәй. Иҙ ҙур сират Өфөлә - йыл башынан 17 мең бала сиратта тора ине.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ХЕҘМӘТ БАҘАРЫНА...
## иҡтисадсылар кәрәкмәй

**Башҡортостанда һәр дүртенсе эшһеҙ - 14 йәштән 29 йәшкә тиклемге йәш кеше, тип белдерҙе БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Фидус Ямалетдинов. Эш тәжрибәһе булмаған йәштәрҙе эшкә алып бармайҙар, һөҙөмтәлә йәш белгес конкурентлыҡҡа һәләтһеҙ булып сыға. Ә эш биреүсегә барыһын да белгән түгел, бөтә нәмәне лә эшләй белгән хеҙмәткәр кәрәк.**

Халыҡты эш менән тәьмин итеү дәүләт идаралығы етәксеһе Тимерхан Биккинин әйтеүенсә, йәштәр эш һайлағанда иң тәүҙә унын абруйлы булыуына һәм матди яғына иғтибар итә, ә хеҙмәт баҙары бөгөн яҡшы түләнә торған эш урындары менән тәьмин итә алмай.

Эшһеҙҙәр араһында башланғыс һөнәри учреждениеларҙы тамамлаусылар - 15 процент, урта һөнәри белемлеләр - 44 процент, юғары белемлеләр һаны 44 процент. Хеҙмәт баҙарында иҡтисадсылар, бухгалтерҙар, юристар, финансистар, программистар, дәүләт һәм муниципаль тәьминиәт буйынса белгестәр талап ителмәй. Һөнәри училищеларҙа бухучет, ПЭВМ операторы, ашнаҡсы, автомобиль транспортын ремонтлау буйынса слесарь һөнәрен үҙләштереүселәргә лә эш табыуы ауыр.

Тимерхан Биккинин фекеренсә, эш биреүселәр һуңғы осорҙа белгестең шәхси характеристикаһына ҙур иғтибар бүлә. Үҙ эшен яҡшы белгән, универсаль, үҙ аллы, яуаплы хеҙмәткәр юғары баһалана.

Хеҙмәт баҙарында талап ителгән һөнәри-квалификация структураһы һәм тәҡдим ителгән эшсе көстәр араһында дисбаланс һаҡлана. Эшсе һөнәрҙәр буйынса вакансиялар өлөшө 81 процент тәшкил итә. Шул уҡ ваҡытта иҫәптә тороусы эшһеҙ граждандарҙың 40 проценты юғары йәки урта һөнәри белемгә эйә. Бөгөн төҙөлөш предприятиеларына бетонсылар, ташсылар, буяусылар, биҙәүселәр талап ителә, ә ауыл ерҙәрендә тракторсылар, киң профилдәге механизаторҙар, медицина хеҙмәткәрҙәре, ветеринар табиптар, зоотехниктар етешмәй.

Шуның өсөн дә идаралыҡта халыҡты эшкә урынлаштырыу буйынса күп эштәр башҡарыла. Ағымдағы йылдың туғыҙ айы эсендә ваҡытлыса эшкә урынлаштырыу программаһында башланғыс һәм урта һөнәри уҡыуҙы тамамлаусы 900 йәш белгес, 32 мең балиғ булмаған, шул иҫәптән "ауыр холоҡло" үҫмерҙәр ҡатнашҡан. Йәштәр араһынан 600 кеше йәмәғәт эштәренә йәлеп ителгән.

Эш менән тәьмин итеү проблемаһын хәл итеүҙә уҡыу йорттарына булдырылған уҡыу йорттарын тамамлаусыларға эшкә урынлаштырыуға ярҙам итеүсе үҙәктәр әүҙем ҡатнаша. 2010 йылда төрлө предприятиеларҙа стажировка үтеүсе йәш белгестәр һаны 3844 кешегә етһә, әлеге мәлдә стажировкала 3225 кеше ҡатнаша, уларҙың яртыһы - урта һөнәри белем биреүсе уҡыу йорттарын тамамлаусылар.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Ошо көндәрҙә донъяның иң аҡыллы ҡатын-ҡыҙҙары Өфө ҡалаһына Бөтә донъя шашка чемпионатына йыйылды. Планетаның иң көслө спортсылары исемлегенә Латвиянан Зоя Голубева, Украинанан Дарья Ткаченко һәм Ольга Балтажи, Нидерландынан (Голландия) Нина Хукман, Рәсәйҙән Матрена Ноговицына (Саха-Яҡут республикаһы) һәм Тамара Танһыҡҡужина (Башҡортостан) ингән. Сараға Бөтә донъя шашка федерацияһы президенты Гарри Оттен да килде. "Был ярышта ҡатнашыусы һәр уйынсының беренсе урынға сығыу мөмкинлеге бер тигеҙ, һәр уйынсының да әҙерлек кимәле бербереһенән әллә ни айырылмай", - тигәйне Гарри Оттен әфәнде сараны асҡанда. Ә шулай ҙа был аҡыллы ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡайһыһы еңер? Ошо һорау борсой шашка һөйөүселәрҙе.**

# АҠЫЛЛЫ ҠАТЫН-ҠЫҘҘАР...
## шашкала ярыша



Брифинг башланыр алдынан данлыҡлы яҡташыбыҙ Тамара Танһыҡҡужина менән бер аҙ һөйләшеп алыу форсаты тейҙе. "Республикабыҙҙың башҡа ҡалаларында ла Ишембай шашка мәктәбе кеүек мәктәптәр бармы?" - тигән һорау менән мөрәжәғәт иттек дүрт тапҡыр донъя чемпионына.

- Бөгөнгө көндә Башҡортостанда был спорт төрө билдәлелек яулай бара, - тине Тамара Танһыҡҡужина. - Ҡалаларҙа клубтар асыла. Айырыуса Өфө һәм Стәрлетамаҡ ҡалаларында ярайһы уҡ алға китеш һиҙелә. Яҡшы һөҙөмтәләргә ирешеү өсөн иң беренсе сиратта көслө тренерҙарҙың булыуы мөһим. Был йәһәттән үҙем дә, профессиональ шашкасы булараҡ, бар көсөмдө һалам. Шашкасыларҙы әҙерләү, гәҙәттә, мәктәптән башлана. Шуға күрә беҙҙең клубта уҡыусы балалар ҙа әүҙем шөғөлләнә. Шуныһы иғтибарға лайыҡ - түңәрәккә йөрөгән балаларҙың ваҡыты бушҡа сарыф ителмәй. Быны атаәсәләр ҙә яҡшы аңлай, шуға күрә бик теләп йөрөтәләр. Шашка менән шөғөлләнгән баланың маҡсатҡа ынтылыусы көсәйә, сөнки ул һәр ваҡыт еңеүгә ынтыла. Ынтылышлы баланың киләсәге ҙур.

-Баланың был шөғөлө уҡыуына ниндәйҙер йоғонто яһаймы?

- Әлбиттә, яһай. Шашка менән дуҫ булғандарҙың теүәл фәндәргә һәләттәре арта. Беҙҙә шөғөлләнгән бөтә балалар ҙа мәктәптә яҡшы өлгәшә. Миҫал өсөн, ата-әсәләре ауылдан ҡалаға күскән Илдар исемле малайҙы килтергәйнеләр. Илдар математика һәм физиканан насарыраҡ өлгәшкән. Беҙҙең клубта шөғөлләнә башлау менән теүәл фәндәргә барымы ла ҡырҡа үҙгәрҙе. Ул хатта физика, математика буйынса олимпиадаларҙа ҡатнаша башланы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әле барған Чемпионатты интернет селтәренән ҡарарға мөмкин. Бының өсөн www.fmsr.ru сайтына инергә кәрәк. Профессионалдар ниндәй юлдар менән бер-береһен "ота" икәнен электрон таҡталар ярҙамында үҙ күҙегеҙ менән күҙәтә алаһығыҙ. Әлегә Нина Хукман, ҡалғандарҙы өс мәрәйгә ҡалдырып, беренселекте үҙ ҡулында ышаныслы тота. Зоя Голубева, Ольга Балтажи, Матрена Ноговицыналар өсәр мәрәй менән икенсе урынды бүлешә. Барыбыҙҙы ла аптырашта ҡалдырып, Тамара Танһыҡҡужина һәм Дарья Ткаченко икешәр мәрәй менән әлегә аҙаҡҡы урында. Ярыштар башланыр алдынан Нина Хукман: "Был ярышта бер тапҡыр ҙа донъя чемпионы исемен алмаған кеше булараҡ, билдәле дәғүәселәрем менән ярыша алыуым өсөн шатмын", - тигәйне. Һуңғы еңеүенән һуң, "Миңә бары тик уңыш йылмая", тине. Яҡташыбыҙ уға етеп, үтә алырмы, юҡмы? Ваҡыт күрһәтер...**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

ХОККЕЙ

# ОТОЛОП ТА АЛАБЫҘ...

**"Салауат Юлаев" командаһының һирәк-һаяҡ отолоуы яңылыҡ түгел. Ә бына Түбәнге Новгород ҡалаһының "Торпедо"һынан 0:3 иҫәбе менән еңелеүе сенсациялы яңылыҡ. Быға хәтлем "Салауат Юлаев" бер ваҡытта ла ҡоро иҫәп менән отолғаны юҡ ине әле. 126 матч буйы юлаевсылар еңелгән хәлдә лә ҡаршы яҡ ҡапҡаға шайба индермәй ҡалманы.**

Шулай 0:3 иҫәбенә отолоу юлаевсыларҙы тамам ғәрләндерҙе. Улар 20 октябрҙә Ярославль ҡалаһының "Локомотив" командаһын 6:1 иҫәбенә ҡыйратты.

Уйын башланыу менән үк "Салауат Юлаев" уйынсылары тотоп тыя алмаҫлыҡ ажарлы, ярһыулы көс менән "Локомотив" ҡапҡаһы яғына ябырылды. Уңыш көттөрмәне, 4-се минутта уҡ Патрик Торесен Александр Радулов ярҙамы менән иҫәп асты. Осор уртаһында Константин Кольцов икенсе шайбаны майҙан хужалары ҡапҡаһына оҙатты.

Икенсе осор шулай уҡ юлаевсыларҙың көслө һөжүме менән башланды. Тәүҙә Андрей Кутейкин майҙан хужалары ҡапҡасыһы Дмитрий Кочневты ҡапҡа эсенән 3-сө шайба алырға мәжбүр итте. Тик шунан һуң ғына "Локомотив" хоккейсылары яуап шайбаһы индерә алды. Был беренсе һәм һуңғы шайба булды.

Юлаевсылар тағы ла әүҙемерәк һөжүм итте. Команда капитаны Виктор Козлов 4-се, ә Патрик Торесен 5-се һәм 6-сы голдың авторҙары булды.

Юлаевсылар бына шулай көйәрмәндәр алдында бик яҡшы аҡландылар.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә быйылғы өс квартал йомғаҡтары буйынса сәнәғәт етештереү индексы 110,5 процентҡа еткән. Был баш ҡалала сәнәғәттең тотороҡло үҫеше тураһында һөйләй. Туғыҙ ай эсендә эре һәм уртаса сәнәғәт предприятиелары тарафынан 296 млрд һумлыҡ тауар етештерелгән һәм хеҙмәт күрһәтелгән. Был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 30 процентҡа күберәк. Сәнәғәт етештереү индексының бигерәк тә нәшриәт һәм полиграфия тармағында үҫеше һиҙелерлек. Шулай уҡ химия производстволары ла уңышлы үҫешә. Аҙыҡ-түлек тармағында сәнәғәт етештереү индексы быға тиклемге түбән килеш ҡала ине, әле бында ла үҫеш күҙәтелә.

✓Өфөлә уртаса эш хаҡы кимәле 21165 һум тәшкил итә. Миллиондан ашыу халҡы булған ҡалалар араһында был өсөнсө күрһәткес. Бер йылда Өфөлә уртаса эш хаҡы 26 процентҡа артҡан - был инфляция темптарына яҡынса тап килә. Өфөнөң хеҙмәт баҙарында ла ыңғай динамика күҙәтелә - ярты йыл инде көсөргәнешлек коэффициенты унда бер проценттан кәмерәк. Әлеге ваҡытта, мәҫәлән, ҡаланың мәшғүллек хеҙмәтендәге 10,5 мең вакансияға ни бары 10,3 мең эшһеҙ теркәлгән.

✓ "Ағиҙел" фабрикаһы алтын туйҙарын билдәләүсе ғаиләләргә Президент бүләге әҙерләй башланы. Был комплектҡа сигелгән таҫтамал, ике плед һәм биҙәкле ағас ҡалаҡтар инә. Фабрика шулай уҡ икенсе дәүләт заказы - яңы тыуған сабыйҙарға 800 һумлыҡ комплекттар әҙерләүҙе лә дауам итә.

✓Өфөлә троллейбустар етештереү былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда ике тапҡырға тиерлек артҡан. Быйыл туғыҙ айҙа Башҡортостан троллейбус заводы 92 троллейбус етештергән, уларҙың 55-е ҡулланыусыға оҙатылған да инде. Ә шулай ҙа был тармаҡтағы етештереү күләме кризисҡа тиклемге кимәлгә етмәгән әле, ул саҡта заводта йылына 125 троллейбус етештерелә торған булған.

✓15 октябрҙән 30 ноябргә тиклем Өфө ҡала округының муниципаль китапханалары араһында наркотиктарға ҡаршы "Беҙ бергәләп барыһын да булдырабыҙ!" тигән конкурс үткәрелә.

ҺОРАУ - ЯУАП

# ТОРЛАҠЛЫЛАРҒА

## МИРАҪҠАМЫ, БҮЛӘК ИТЕРГӘМЕ?

**Улым да, ҡыҙым да башҡаланды. Улым икенсе бер ҡалала йәшәй, минә һирәк кенә килә, ә ҡыҙым минән алыҫ түгел, гел килеп, хәл белеп, ярҙам итеп тора. Хосусилаштырылған фатирымды ҡыҙыма ҡалдырғым килә, тик белмәйем: нисек эшләһәм, яҡшыраҡ булыр - васыят яҙырғамы, әллә бүләк итергәме?**



- Бындай осраҡтарҙа, әгәр балаларың йәки башҡа туғандарың менән ысын мәғәнәһендә йыйылы, ышаныслы мөнәсәбәттәрҙә икәнһең, милек тапшырыуҙың иң уңайлы юлы - уны бүләк итеү, ти юристар.

Бындай юлдың үҙенсәлеге шунда: фатир бүләк итеүсенең яҡынына милек рәүешендә шунда уҡ күсә һәм уның милекселек хоҡуғына бер кем дә яғына алмай. Әйткәндәй, шуға күрә лә бит фатирҙы үҙең тулыһынса ышанған, һыналған кешегә генә бүләк итергә кәңәш бирәләр, юғиһә, тормошта торлаҡтың яңы хужаһы бүләк итеүсене һыйҙырмай, урамға ҡыуып сығарған (хас та әкиәттәге төлкө ҡуянды уның үҙ өйөнән ҡыуған кеүек) осраҡтар ҙа етерлек.

Бүләк итеү килешеүе төҙөү өсөн, башҡа төр милек эштәрендәге кеүек үк, документтар тупланмаһы йыйыу талап ителә. Бына улар:

- фатирға милекселек хоҡуғы тураһындағы таныҡлыҡ;
- фатирҙың кадастр паспорты (БТИ-ла бирелә);
- бүләк итеү килешеүе;
- эште дәүләт теркәүе тураһында ғариза;
- теркәү өсөн дәүләт пошлинаһы түләү хаҡындағы квитанция (пошлина күләме бөгөн - 1 мең һум).

Шуны ла иҫтә тотоғоҙ: Граждандар кодексы бүләк итеү килешеүен ябай, яҙма рәүештә үҙ аллы йә булмаһа белгестәр ярҙамында көҙимге ҡағыҙ битендә төҙөргә рөхсәт итә. Шул уҡ ваҡытта ул нотариус тарафынан раҫланырға тейеш. Был осраҡта нотариус килешеүҙе үҙе төҙөй, йыйылған документтарҙың дөрөҫлөгөн тикшерә, был эштә ҡатнашҡан яҡтарға уларҙың бурыстарын һәм хоҡуҡтарын, бүләк итеүсе файҙаһына булмаҫтай хәл килеп сығыу ихтималлығын аңлата.

Был осраҡта, әлбиттә, нотариус хеҙмәттәре өсөн түләргә тура киләсәк (БТИ баһаламаһы буйынса, фатир хаҡының 0,5-тән 1 процентҡа тиклем күләмдә). Икенсенән, өҫтәмә документ кәрәк буласаҡ: БТИ-нан фатирҙың инвентаризациялау хаҡы күрһәтелгән белешмә.

## АРЗАН ДА, ЮҠҠА СЫҒАРЫРҒА ЛА БУЛА

**Мираҫ итеп торлаҡ күсереүҙең төп уңайлылығы уны башҡарыу эшенең ябайлығында. Фатир хужаһы быының өсөн илебеҙҙең теләгән бер нотариусына мөрәжәғәт итә ала, шул уҡ ваҡытта унан паспортынан башҡа документ талап ителмәй.**

Ә шулай ҙа васыят яҙыуҙы мираҫсы йәшәгән урыны буйынса нотариус конторағында башҡарһа һәм вариҫына был хаҡта хәбәр итһә, яҡшыраҡ, ти юристар. Эш шунда: Рәсәйҙә әлегә бөтә васыятнамәләр һәм вариҫтар хаҡында берҙәм мәғлүмәт базаһы юҡ. Шуға күрә, хәбәрҙар булмаған хәлдә, вариҫтың мираҫһыҙ тороп ҡалыуы ла бар, сөнки васыят хаҡында мираҫсыға хәбәр итеү нотариустың вазифаһына инмәй.

Торлаҡ хужаһының васыят яҙыу юлын һайлауы шуның менән уға отошло: был гәмәленән ул теләгән ваҡытта баш тарта һәм васыятты юҡҡа сығара ала. Васыятты үҙгәрткән осраҡта (быының өсөн уны яңынан яҙыу ҙа етә) яңы мираҫсы билдәләнә. Ә инде васыят ҡарары юҡҡа сығарылһа, мираҫ вариҫсыларға закон буйынса, йәғни мираҫсылар сираты буйынса тейешле булып сыға.

Шуныһына ла иғтибар итеү кәрәк: васыят фатир хужаһына милке менән үҙе теләгән гәмәлдәрҙе башҡарыуға (бүләк итергә, һатырға, торлаҡ шарттарын яҡшыртыу өсөн ипотекаға һалырға һ.б.) ҡамасаулыҡ итмәй. Көсөнә ингән мәлгә мираҫсы торлаҡты берәйһенә бүләк итеп йәки һатып өлгөргән булһа, был васыят юҡҡа сығарылған, тигән һүҙ.

Торлаҡ васыят ителгән вариҫсы өсөн ҡаршылыҡ булырҙай бер нисә фактор барлығын да әйтеп китеү кәрәк.

1) Мираҫтың бер өлөшөнә ҡалған вариҫсылар дәғүә итеүе ихтимал. Улар васыят яҙыусы ихтыярына бәйле булмаған һәм милек башҡа вариҫсыға васыят ителгән хәлдә лә мираҫтан өлөшкә хоҡуғы булған мотлаҡ вариҫсылар. Әлеге мотлаҡ өлөш түбәндәгеләргә тейеш:

- васыят яҙыусының балаларына (бәлиғ булмағандарына һәм эшкә һәләтһеҙ өлкән йәштәгеләренә);
- эшкә һәләтһеҙ ата-әсәһенә, тормош юлдашына, шулай уҡ васыят ҡалдырыусы үлерҙән алда кәмендә бер йыл уның аҫрауында булған кешеләренә;
- васыят ҡалдырыусы тарафынан иғтибарға алынмаған һәм шул уҡ арҡала дәғүә белдереүсе башҡа нәҫел-нәсәбе.

Шуныһы ла бар: нотариустар раҫлауынса, васыятты гәмәлгә яраҡһыҙ, тип танытырға маташыуҙар бик енелдән түгел (быға суд аша, дәлилдәр ярҙамында ғына өлгәшергә мөмкин).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләнә.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

**Октябрҙән илдә балалар баҡсалары өсөн яңы санитар ҡағиҙәләр эшләй башлаясаҡ. Яңы санитар ҡағиҙәләр рәсми рәүештә балалар баҡсаһының ике яңы төрөн - ғаилә һәм баланы аҙ ваҡытҡа ҡалдырыу төрҙәрен таныясаҡ.**

# БАЛАЛАР БАҠСАҺЫНА ҠЫТЛЫҠ...

## ошо рәүешле хәл ителерме?

Элек мәктәпкәсә учреждениеларҙың был ике төрөнә ҡарата ғәҙәттәге балалар баҡсаларына ҡулланылған шул уҡ нормативтар талап ителһә, хәҙер бәләкәй типтағы баҡсалар өсөн талаптар әллә ни ҡаты булмаясаҡ. Мәҫәлән, баланы ваҡытлыса ҡалдыра торған мәктәпкәсә учреждение өсөн бинаны торлаҡ йорттарға төкәтмә рәүешендә йә булмаһа ошо уҡ йорттоң тәүге ҡатында асырға була. Сағыштырығыҙ: ғәҙәттәге балалар баҡсаһы мотлаҡ айырым бинала эшләй. Бынан тыш, баланы ваҡытлыса ҡалдыра торған учреждениены мәктәп бинаһында ла асырға мөмкин. Ундағы бүлмәләр мөмкин тиклем аҙ һанда була: кейенеү-сисенеү шкафтары йәки элгестәр ҡуйылған бүлмә, төркөм өсөн бүлмә, туалет һәм йыуыну торған бүлмә. Ә персонал өсөн гигиена бүлмәһе айырым булырға тейеш. Саф һауала йөрөү өсөн махсус балалар майҙансығы ла талап ителмәй, быының өсөн эргәтирәләге сквер, парктарҙы, шулай уҡ торлаҡ йорттар янындағы балалар майҙансыҡтары файҙаланыла.

Баланы ваҡытлыса ҡалдыра торған баҡсаларҙың ғәҙәттәгеләренән төп айырмаһы шунда: бында балалар 5 сәғәттән дә оҙағыраҡ ҡалырға тейеш түгел. Шуға күрә уларға ашарға әҙерәү өсөн тотош бер комплекс та талап ителмәй, ни бары ҙур булмаған буфет та етә.

Элек бәләкәй төрҙәге балалар баҡсалары өсөн айырым талаптар булмағанлыҡтан, уларҙа ла ғәҙәттәге балалар өсөн берҙәм стандарт ҡулланыла. Ә был тотош нормативтар йыйылмаһы, уларҙы үтәү өсөн бик ҙур күләмдә эш башҡарырға, өҫтәүенә, финанс сығымдар бүленергә тейеш. Хәҙер иһә яңы санитар ҡағиҙәләргә ярашлы, баланы ваҡытлыса ҡалдырыу төркөмдәре асыу ҡыйынға төшмәйәсәк. Быының өсөн торлаҡ йортҡа төкәтеп төҙөлгән магазин бинаһын бүлеү ҙә етә.

### Һандар һөйләй

**➔ Рәсәй ата-әсәләренең 10 процентының баланы бер нисә сәғәткә генә ҡалдыра торған ҡыҫҡа ваҡытлы төркөмдәргә йөрөтөргә мөмкинлеге бар.**

**➔ Бөгөн ил буйынса 1 миллион балаға мәктәпкәсә учреждениела урын етешмәй.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Йөрәк өсөн



150-200 грамм бешкән ҡабаҡҡа 1 ҡалаҡ бал ҡушып ашау йөрәктең эшмәкәрлеген яҡшырта, үт шәберәк ҡыуыла, эсәктәр таҙара, ауырлығын кәметергә теләүселәргә лә файҙа килтерә.

### Яман шешкә ҡаршы

Яман шеш ауырыуҙарына ҡаршы көрәшеү өсөн сәйгә корица, бер нисә кипкән ҡәнәфер (гвоздика) һәм балғалаҡ осона ғына элеп имбирь ҡушып, бешекләп эсһәң, файҙа булыр.

Әйткәндәй, һарымһаҡ ашағандан һуң бер бөртөк кенә кипкән ҡәнәфер сәйнәп ҡуйһаң, һарымһаҡ еҫе сығып тормаҫ.

### Иммунитет күтәреү

Организм яҙлы-көҙлө төрлө ауырыуҙарға бирешеүсән булып китмәһен өсөн сәйгә кейәү үләне (чабрец), мәтрүшкә, һары мәтрүшкә ҡушып эсергә кәрәк. 10 көн эскәндән һуң организмды ял иттереп алығыҙ һәм курсты тағы ҡабатлағыҙ.

4 стакан кефирға 100-150 грамм бешкән ҡабаҡ, 1 ҡалаҡ бал ҡушып болғатып эсеп торһаң да иммунитет яҡшыра, хәл инеп ҡала. Был эсемлек эсәктәрҙең эшмәкәрлеген дә яҡшырта.

### Ашҡаҙан сей яраһынан

Ярты килограмм таҙартылған ҡабаҡты эре ҡырғыстан үткәреп, бер тотам ирәүән (ревень) япрағын турап ҡушып, ҡайнар хәлгә еткерергә. Һуңынан крахмал ҡайнатып ҡушҡас, ҡайнатма һыуый төшкәс, 1 балғалаҡ бал өҫтәргә. Көн һайын 20 грамлап 1 тапҡыр ашарға.

### Атеросклероз

Был сирҙән ҡотолоу өсөн 1 литрлы банкаға клевер сәскәһен йыуып тултырғас, өҫтөнә спирт ҡойорға ла ике аҙна буйы ҡараңғы урында тоторға. Һөҙөп алғас, 1 ай көнөнә 20 грамлап 1 тапҡыр ҡабул итергә.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

✓ ***Бала эс ауыртыуына зарланмаҫ элек үк эшләргә кәрәк быны. Хәрәкәт иттереү, иң яҡшыһы йөрөп алыу, аҙ ғына ҡорот ҡаптырыу, берәй балғалаҡ буҙа эсереү ашҡаҙан өсөн ғәжәп яҡшы.***






# ОЛОЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

## Беренсе өгөт

Тәнегеҙҙең ағзаларын гонаһтарҙан һаҡлау өсөн Аллаһы Тәғәлә хәҙрәттәре ҡушҡанды эшләгеҙ. Фармандарын үтәгеҙ. Ҡайғы килгәндә, сабыр итегеҙ. Халыҡҡа инсафлыҡ күрһәтегеҙ һәм уларҙан инсафлыҡ көтмәгеҙ. Һис бер мосолманды һәм һис бер әҙәм балаһын дошман тип иҫәпләмәгеҙ, Аллаһы Тәғәлә биргән ризыҡ һәм мәртәбәләренә ҡәнәғәт булығыҙ. Халыҡ хөрмәтен аяҡ аҫтына һалмағыҙ. Ҡулығыҙҙа булған байлыҡты тейешлесә тотоғоҙ. Үҙегеҙгә кәрәкмәгән әйберҙәрҙе тикшереп йөрөмәгеҙ. Әҙәм балаһы осрағанда сәләм бирегеҙ, хәлен һорағыҙ. Вәғәҙәгеҙҙә тороғоҙ. Алсаҡ булығыҙ. Көсөгөҙ еткәнсе һәр кемгә ярҙам бирегеҙ. Изгелекле кешеләрҙе дуҫ күрегеҙ. Уҫал кешеләргә яҡшы мөнәсәбәт күрһәтегеҙ. Үҙегеҙ мохтаж булған әйберҙәрҙе өйрәнегеҙ. Белем өсөн ғәрләнмәгеҙ. Халыҡты рәнйетмәгеҙ. Күп фекерләгеҙ һәм аҙ һөйләгеҙ. Наҙан һәм хыянатсыларға серҙәрегеҙҙе сисмәгеҙ һәм улар менән кәңәшләшмәгеҙ. Үҙ белгәндәрегеҙгә таянмағыҙ. Йыуаштарҙың мәкерҙәренән, сая һәм үткер кешеләрҙең зарарынан һаҡланығыҙ. Ғалимдарға эйәрегеҙ, әҙәп эйәләренә ҡарындаш булығыҙ. Кешелекле кешеләрҙән үрнәк алығыҙ һәм боҙоҡтар менән ҡатнашмағыҙ. Өҫтөгөҙҙө пак һәм күңелегеҙҙе саф йөрөтөгөҙ. Дин һәм донъя бурыстарын киләсәк быуынға тапшырығыҙ. Халыҡ менән илтифатлы булығыҙ. Яҡын ҡәрҙәштәрегеҙгә барып хәлдәрен белегеҙ. Халыҡ ышанған уй-фекерҙәренә ҡаршы килмәгеҙ.Ҡулығыҙҙан килгән хеҙмәтте һис кемдән ҡыҙғанмағыҙ. Һәр көн башығыҙҙы яҫтыҡҡа ҡуйғанда көн буйы ниндәй эш башҡарғанығыҙҙы иҫәпләгеҙ, изге эштәрегеҙ булһа, Аллаһы Тәғәләгә шөкөр итегеҙ, уҫал эштәрегеҙ булһа, үкенегеҙ, тәүбә ҡылығыҙ һәм иртәгә эшләйәсәк эштәрегеҙ хаҡында план ҡороғоҙ: "Иртәгәһен ишәк ҡайғыртһын", - тимәгеҙ. Йәберләнеүселәрҙең доғаһынан һаҡланығыҙ һәм ләззәттәрҙе боҙа торған үлем хаҡында онотмағыҙ. Ғәмәлдәр дәфтәрегеҙгә боҙоҡ әйберҙәрҙе яҙҙырмаҫҡа тырышығыҙ. Кис һәм көндөҙ һеҙҙең изге ғәмәлдәр ҡылыу өсөн ҡалған ғүмерегеҙҙе ҡыҫҡарта, һис иһә кис һәм көндө изге ғәмәлдәрегеҙ менән үткәрегеҙ. Мөбәрәк шәриғәтебеҙгә ҡаршы булмау шарты менән һәр кемгә итәғәтле булығыҙ. Боҙоҡ фиғелдәр менән донъя тулғанда һеҙ яҡшы холоҡтар менән шәрәф яулағыҙ.

(Дауамы бар).

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА

# ТӘНӘЙҘӘРГӘ ТӘҒӘЙЕН ТӘРБИӘ

## Һигеҙенсе һабаҡ: "Баланы ашата белеү ҙә мөһим"




**Әсәйҙәр сабыйҙы, йәш баланы ашатыу тураһында бик йыш һүҙ ҡуҙғата. Был хаҡта махсус әҙәбиәт бик күп. Әммә шул уҡ ваҡытта халыҡ тәрбиәһенә лә ҡолаҡ һалырға кәрәк, сөнки халыҡтың быуаттар буйы тупланған тәжрибәһе, шөкөр, быуындан-быуынға күсеп килә әле.**

Күкрәк һөтө имгән сабыйҙы беҙҙең әсәйҙәр өс ай ярым, дүрт ай тирәһендә бик аҙ ғына күләмдә ашарға өйрәтә башлай торған булғандар. Әммә, ашарға, тигәс тә, махсус рәүештә ниндәйҙер аҙыҡ бешереп түгел, ә әсә үҙе ашаған ризығынан "иренен сылатырлыҡ, тел осона эләгерлек" кенә итеп "аш тәме" һиҙҙертеп ҡуйған. Был аҙыҡтың миҡдары халыҡ теле менән бик оҫта әйтелгән. Тимәк, баланы туйҙырмаған, ашатмаған, ә уға яйлап ҡына аш тәме белгертеп алған. Шулай итеп, сабый ашҡаҙаны аҡрынлап-аҡрынлап икенсе төрлө аҙыҡты ла эшкәртергә ҡулайлаша башлаған. Имеҙгән саҡта көнөнә бер тапҡыр, унан ике һәм артабан шул сама менән был миҡдар арттырыла барған.

Бала ашай башлаған саҡта инде бик һаҡ, иғтибарлы булырға кәрәк. Сама белгән сайҡалмаҫ, ти халыҡ. Ә баланың ашау самаһын әсәй белә. Бала үҙе белмәй. "Һорай бит, туймағанға ынтылалыр инде", тиҙәр. Ынтыла икән - күҙ алдына ҡуйма, һорай икән - алдаштыр. Ә инде бала ниндәй аҙыкты булһа ла артығыраҡ ашаған икән, ашҡаҙанын эшкәртеп ебәреү сараһы күрергә кәрәк. Бала эс ауыртыуына зарланмаҫ элек үк эшләргә кәрәк быны. Хәрәкәт иттереү, иң яҡшыһы йөрөп алыу, аҙ ғына ҡорот ҡаптырыу, берәй балғалаҡ буҙа эсереү ашҡаҙан өсөн ғәжәп яҡшы. Өйҙә һәр ваҡыт ҡорот тотоу уғата һәйбәт. Ашаған һайын балғалаҡ осо менән генә ҡорот ҡаптырып ҡуйыу - ашҡаҙандың эшмәкәрлеге өсөн ғәжәп һәйбәт сара.

Баланы ирекһеҙләп ашатырға ярамай. Ризаһыҙ, ихласһыҙ туҡланыу - йоғошһоҙ була. Ашау, йотоп ебәреү генә шарт түгел. Уны эшкәртергә кәрәк. Ихлас ашалмаған аҙыҡ насар эшкәртелә. Аш ашаманым, таш ашаным, тиҙәр ундай осраҡта. Бала ихлас, яратып ашаһын. Уның өсөн иң яҡшыһы - алдаштырыу, ризыҡтың файҙаһын аңлатыу.

Ғөмүмән, баланың сәләмәтлеге ашау-эсеүгә ныҡ бәйле. Ерлектәге аҙыҡ менән туҡланыуҙың өҫтөнлөгө тураһында һәр саҡ әйтелеп тә, яҙылып та тора. Шуның өсөн ҡайҙандыр ситтән килгән ризыҡ менән мауыҡмаҫҡа, баланы мөмкин тиклем ҡурсаларға кәрәк. Һирәкләп кенә, тәмләп ҡарау өсөн генә ашатыу яҡшы.

Ҡайһы бер киң күңелле кешеләр мул ғына итеп күстәнәс йөрөтөүсән. Балаға кәнфит, башҡа төрлө тәмтом алалар ҙа ишектән ингәс үк тотторалар. Яраймы уға, юҡмы - уныһын һорап та тормайҙар. Урамда йәки башҡа урында балаға кәнфит тоттороусандар. Ундай йомартлыҡтан да ҡурсаларға тырышырға кәрәк.

Балаға тәм-томдоң артығы кәрәкмәй. Ҡайһы бер балаға икмәккә яғып варенье ашаталар. Ғөмүмән, емеш-еләкте ҡайнатма рәүешендә түгел, ә киптерелгән йәки ҡаҡ итеп ҡойолғаны ашатыу йәки компот ҡайнатыу күпкә файҙалыраҡ. Балаға киптерелгән, урында үҫкән емеш һыуы эсереү яҡшы.

"Балам насар ашай. Ниндәй кәңәш бирерһегеҙ икән?" тип шылтыратҡайны телефондан бер йәш әсә. Бер аҙ кәңәштәр биргәйнем, әле рәхмәт әйтеп тағы шылтыратты. "Балам һауығып-матурланып китте. Рәхмәт", ти. Шуға ашауға сибек балаһы менән яфаланған әсәйҙәргә ярҙамға гәзит биттәре аша ла кәңәштәремде яҙырға булдым.

Бала, ғәҙәттә, тәм-томға әүәҫ. Был әүәҫлекте ваҡытында сикләмәһәң, әлбиттә, уның ашҡаҙанына зыян буласаҡ, сөнки тәм-томдо саманан артыҡ ашатыу уның башҡа аҙыҡтарға тартымын кәметә. Ә, билдәле булыуынса, бала организмы үҫешһен өсөн ризыҡтың һәр төрлөһө, бигерәк тә туҡлыҡлыһы, туйымлылығы юғары булған аҙыҡ кәрәк. Ундайҙарға икмәк, айырыуса ҡара икмәк, һөт аҙыҡтары, бутҡа, картуф, йәшелсә, еләк-емеш, һурпа, талҡан, буҙа һәр төрлө емеш кеҫәле һәм башҡа ошондайҙар инә. Ашауға ҙур иғтибар биргән әсәйҙәр, әлбиттә, һәр ваҡыт консерва, пакеттағы ҡаты-ҡото, тәм-том, ярымбешерелгән аҙыҡ, колбаса ашатыуҙы ныҡ сикләй. Бала, мәҫәлән, бутҡа ашауға әүәҫ түгел икән, ни эшләргә. Бутҡаның бит һәр төрлөһөн ашатырға кәрәк. Ҡарабойҙай, һоло, тары, бойҙай, дөгө һәм башҡа ярма бутҡаһы.

Үҙ тәжрибәмдән сығып, бер-нисә кәңәш бирмәксемен. Бутҡаны, бигерәк тә һоло ярмаһыныҡын, бала ихлас ашамай. Шуның өсөн мин тәүҙә бутҡа бешереп, аҙ ғына он һәм йомортҡа ҡушып, ҡоймаҡ итеп ҡоям. Ә ҡоймаҡты һәр бала ихлас ашай. Тәмен тойоп, ҡабул иткәс, аҡрынлап ҡына бутҡаға күсерәм.

Тағы бер миҫал. Ашҡаҙаны туҡтауһыҙ ауыртҡан бер баланы ҡарарға тура килде. Усы тулы төймә дарыу. Сәғәткә ҡарап ҡына әсәһе әйткәнсә дарыу эсә. Буҙа бешерҙем - эсмәй. Бер балғалаҡ ҡына буҙа алдым да: "Тәмләп ҡара әле. Тел осона ғына һал. Аҙ ғына шәкәр өҫтәргә мөмкин. Хәҙер дарыуыңды ялап ҡара" , тим. "Уны яларға ярамай. Әсе. Йоторға ғына кәрәк", ти бала. "Ә ашҡаҙаныңа ниндәй дарыу эләккәнен белергә кәрәк бит. Ялап ҡара", тип ныҡышам тағы ла. "Ныҡ әсе", тип сытырая бала. "Ә буҙа әсе түгел. Етмәһә, ул да дарыу. Ашҡаҙаныңа файҙалы" , тим алдаштырып. "Буҙа эсһәм, был дарыуҙы эсмәһәм дә ярай-мы?" ти бала йәнләнеп китеп. "Ярай", тим. "Атыу буҙа эсәм. Күпме эсергә ярай?" "Күпме теләһәң - шул тиклем"

Һөҙөмтәлә ул малай көнөнә 4-5 стакан буҙа эсә башланы. Дарыу кәрәкмәне лә. Бына ике йыл ашҡаҙан ауырыуы менән яфаланмай. Был миҫалды һөйләп, мин врачтар тәғәйенләгән дауалау сараларын инҡар итмәйем. Әммә шулай ҙа бала ашҡаҙанын бәләкәйҙән дарыу менән боҙмау, ә аҙыҡҡа нығыраҡ баҫым яһау яғындамын. Уның өсөн күберәк тәбиғи ризыҡҡа мөрәжәғәт итеү отошло. Бигерәк тә үҙебеҙҙең төбәктә үҫкән һәм етештерелгән аҙыҡ файҙалы. Мәҫәлән, йогурттың ни дәрәжәлә файҙалы булыуын әйтә алмайым, ә шулай ҙа йәйге айҙарҙа - яландағы, туғайҙағы, баҡсалағы еләк-емеште, ҡышын туңдырылған емеш-еләкте кефирға йәки ҡатыҡҡа һалып, һәйбәтләп татытып, өй йогурты яһап биреү күпкә отошло. Бер стакан кефир йәки ҡатыҡҡа бер балғалаҡ һоло йәки башҡа төр талҡанды һалам да аҙ ғына еләк-емеш өҫтәйем. Яҡшы итеп туғып бирһәң, бынамын тигән емешле эсемлек килеп сыға. Тәүҙә ҡыҙыҡтырып ебәреү өсөн, сынаяҡтың төбөнә ваҡ ҡына борсаҡ кәнфиттәр һалып ебәрергә лә мөмкин. Бәләкәстәр болғаған һайын ҡалҡып сыҡҡан төрлө төҫтәргә ҡыҙығып, был эсемлекте лә эсеп өйрәнә.

Икмәк ашамаған балалар ҙа осрағылай. Йоҡа ғына киҫелгән телемгә йоҡа ғына май яғып, баланың үҙен: "Әйҙә, үҙеңә торт яһап аша әле", - тип, бер нисә урынға емеш-еләк һалдыртып алдаштырһаң, бер-нисә телем икмәк ашалғанын һиҙмәй ҙә ҡалаһың.

Ашауға сибек баланы бер аҙ ашауға ихлас бала менән бергәрәк тотоу ҙа ыңғай һөҙөмтә бирә. Балерина Элеонора Ҡыуатовалар менән күрше йәшәгәндә, ул яңғыҙ үҫкән, ашау мәсьәләһендә ҡатмарлыҡтар тыуҙырған улын беҙҙең балалар янына ашарға алып инґеләй ине.

Ашауға сибек баланы шулай уҡ ашһыу әҙерләшергә ылыҡтырып, үҙенән бешертеп, үҙе бешергән аҙыҡ менән үҙен һыйлау ҙа ыңғай һөҙөмтә бирә.

Бала берәй ере ауыртыуға һылтанһа, тап ана шул ауыртҡан еренә дауа булырлыҡ аҙыҡ тәҡдим итергә кәрәк. "Һин арыш икмәге ашамайһың бит. Ә унда В витамины шул тиклем күп, тап ана шул теш һыҙлауын баҫа ла инде". Йәки: "Бына һөт эс әле. Уның өҫтөндә генә әллә күпме А витамины. Тамаҡ ауыртыуың бөтөр. Ә төбөнә шәп йүгертә торған витаминдар йыйылған. Картуфты ҡабығы менән аша. Унда бер ниндәй дарыу менән алмаштырып булмай торған витаминдар була. Ул кешенең йөрәгенә файҙа. Кеше бер нимәнән дә ҡурҡмаясаҡ" .

Һәм башҡа шундай алдаштырыуҙар табырға кәрәк. Тик бер әйткәндә - бер төрлө, икенсеһендә икенсе төрлө әйтергә ярамай. Бала хәтере яҡшы. Ул онотмай.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы тәрбиәләү әсбабы бына шулай аҡрынлап яҙыла башланы. Мәрйәм апай Бураҡаеваның яҙғандарына башҡа педагогтарҙың, өләсәй-олатайҙар, атай-әсәйҙәрҙең дә ҡушылыуын теләйбеҙ: үҙ һабаҡтарығыҙ, кәңәш-фекерҙәрегеҙ, тәжрибәгеҙ менән һеҙ ҙә уртаҡлаша алаһығыҙ. Милләт киләсәге - ошо тәнәйҙәр ҡулында һәм тәнәйҙәребеҙҙе дөрөҫ тәрбиәләүгә бөтөн көсөбөҙҙө һалырға тейешлегебеҙ хаҡында тағы бер тапҡыр уйланайыҡ әле, йәмәғәт. Хаттар-хәбәрҙәр көтәбеҙ.**

✓ *1979 - 1989 йылдарҙа төбәк башҡорттарының һаны 65,6 мең кешегә кәмеүе һәм татарҙарҙың 70,5 мең кешегә артыуы урындағы айырым даирәләрҙең маҡсатҡа йүнәлешле сәйәсәте һөҙөмтәһе.*

*ИҪӘБЕБЕҘ МӨҺИМ*

# БАШҠОРТОСТАН, ЭЙЕ, КҮП МИЛЛӘТЛЕ,

## әммә унда башҡорт - аҫаба!




### Борсолорға урын юҡ

Шул уҡ ваҡытта рәсми статистикаға ҡараһаң, аҫаба халыҡтың яҙмышы тураһында борсолорға урын юҡ икәнен күрәһең. Быны таблица мәғлүмәттәре лә раҫлай.

| БАССР-ҙағы милләттәр | Халыҡ һаны | | |
|---|---|---|---|
| | 1959 | 1970 | 1979 |
| Башҡорттар | 737711 | 892248 | 935880 |
| Рустар | 1418147 | 1546304 | 1547893 |
| Татарҙар | 768566 | 944507 | 940446 |

Башҡорт халҡының кәмеүе планында төбәктең башҡа районларында ла, шул иҫәптән көнбайыш төбәктә лә, киҫкен хәл-торош күҙәтелмәй. Туймазы районында 1970 йылда 24,2 мең башҡорт иҫәпкә алынһа, 1979 йылда - 24,0 мең; Илеш районында 1970 йылда 34,2 мең , 1979 йылда - 33,6 мең; Благовар районында 1970 йылда - 13,8 мең, 1979 йылда - 11, 7 мең; Саҡмағош районында 13,9 мең һәм 13,5 мең.

1970 йылғы Бөтә Союз халыҡ иҫәбен алыу төбәк районларында 178, 0 мең башҡортто иҫәпкә алған, был 1939 йылғы иҫәп алыу менән сағыштырғанда 16,1 меңгә, 1979 йылға ҡарағанда 823 кешегә күберәк. Татар халҡы, киреһенсә, кәмегән. 1970 йылда көнбайыш районларында 226,5 мең татар иҫәпләнә, был 1939 йыл менән сағыштырғанда 54,1 меңгә әҙерәк.

Күрәһең, был хәл-торош кемгәлер аномаль булып күренә һәм төбәк халҡының бер өлөшөнөң этник сығышын ҡайтанан ҡарау буйынса киң кампания башлана, уның киң ҡоласы уҙған быуаттың 80-се йылдарына тура килә. 1979 - 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыуҙар араһында төбәк башҡорттарының һаны 65,6 мең кешегә кәмеүе һәм татарҙарҙың 70,5 мең кешегә артыуы уларҙың тәбиғи йәки механик хәрәкәте һөҙөмтәһе түгел, ә урындағы айырым даирәләрҙең маҡсатҡа йүнәлешле сәйәсәте һөҙөмтәһе.

2002 йылда советтарҙан һуңғы беренсе халыҡ иҫәбен алыу үтә. Ул Рәсәй Федерацияһында башҡорттарҙың 1673,8 мең кеше, 1989 йылда Советтар Союзындағынан 225 меңгә күберәк икәнлеген асыҡлай. Рәсәй халыҡтары араһында улар һан буйынса рустарҙан (116 млн), татарҙарҙан (5,5 млн), украиндарҙан (2,9 млн) ҡала дүртенсе урынды биләй һәм илдең миллиондан ашыу халҡы булған ете милләт араһынан сыуаштарҙы, чечендарҙы, әрмәндәрҙе уҙып китә.

1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу РСФСР-ҙа 1345,3 мең башҡортто иҫәпкә ала. Күренеүенсә, үткән 13 йылда уларҙың һаны 328,5 мең кешегә артҡан. Урал-Волга буйының совет осоронда автономияға эйә булған алты халҡы араһында башҡорттар - һиҙелерлек артымы булған берҙән-бер халыҡ. Төбәктең башҡа халыҡтарының күрһәткестәре бик наҡыҫ йәки бөтөнләй кире. Рәсәй татарҙарының һаны, мәҫәлән, 1989 - 2002 йылдарҙа ни бары 36 мең кешегә генә артҡан. Сағыштырмаса юғары тыуымлы төрки-мосолман халҡының бындай артымына, күрәһең, элек татарҙың бер өлөшө тип һаналған Ҡырым (4 мең), Себер (10 мең), керәшен (25 мең) татарҙарының 2002 йылғы халыҡ иҫәбен алыуҙа үҙ аллы этностар тип яҙылыуы сәбәпсе.

Республиканан ситтә 452 мең башҡорт, йәғни дөйөм иҫәптең 27,0 проценты, йәшәй. 13 йыл элек БАССР-ҙа улар 600 мең (дөйөм һандың 40 проценты) була.

Башҡорттар күпләп борон-борондан, беҙҙең эраның IX быуатынан башлап этник территорияһы иҫәпләнгән төбәктәрҙә - тарихи Башҡортостанда, Силәбе өлкәһендә - 166,4 мең (Алтай Республикаһының барлыҡ халҡынан саҡ ҡына әҙерәк), Ырымбур өлкәһендә - 52,7 мең, Пермь крайында - 40,7 мең, Свердловск өлкәһендә - 37,3 мең, Ҡурған өлкәһендә - 15,3 мең, Һамар өлкәһендә - 7,9 мең, Һарытау өлкәһендә - 4,0 мең, Татарстан Республикаһында - 15,0 мең, Удмурт Республикаһында - 4,3 мең йәшәй.

Этник тыуған илдәренән тыш, башҡорттар илдең Европа өлөшөнөң төньяғында ла йәшәй: Ямал-Ненец автономиялы округында (7,9 мең), Коми Республикаһында (3,1 мең), Ленинград һәм Мурманск өлкәләрендә - (1,1-әр мең); Көньяҡ федераль округ төбәктәрендә: Краснодар крайында (2,1 мең), Волгоград һәм Ростов өлкәләрендә (1,1-әр мең); Себерҙә: Красноярск крайында (3,9 мең), Саха (Якутия) Республикаһында (2,3 мең), Новосибирск, Омск, Чита, Томск һәм Иркутск өлкәләрендә (1,1 меңдән 2,4 меңгә тиклем); Алыҫ Көнсығышта: Хабаровск крайында (1,4 мең), Амур өлкәһендә (1,2 мең), Приморье крайында (2,1 мең).

Башҡорт диаспораһы яҡын сит илдәрҙә лә бар. СССР тарҡалғанға тиклем Ҡаҙаҡ ССР-ында 41,8 мең, Үзбәкстанда - 34,8 мең, Украинала - 7,4 мең, Тажикстанда - 6,8 мең, Төркмәнстанда - 4,7 мең, Ҡырғыҙстанда - 4,1 мең башҡорт иҫәпләнә. Бөгөн был илдәрҙә башҡорттар һаны күпме икәнен аныҡ ҡына белеү ҙә белмәй, сөнки рәсми мәғлүмәттәр юҡ.

2002 йылғы иҫәп алыу Башҡортостанда 1221 мең башҡортто теркәй. 1989 йылдан алып уларҙың һаны 357,5 мең кешегә, йәғни бер ярым тапҡырға арта. Ауыл ерҙәрендә, бигерәк тә республиканың көнбайыш, төньяҡ-көнбайыш, үҙәк төбәктәрендә иң күп артыу күҙәтелә. Көнбайыш төбәктә аҫаба халыҡ 78,1 мең кешегә арта. Шул иҫәптән, Благовар районында - 10,6 меңгә, Дүртөйлә һәм Туймазы районларында 8,7 - 8,9 меңгә, Йәрмәкәй, Миәкә, Илеш районларында 6,5-әр меңгә арта.

Ҡалаға яҡын булған Ҡырмыҫҡалы (12,8 мең), Кушнаренко (11,1 мең), Иглин (7,4 мең) районлары кеүек айырылып торған үҙәк төбәктә аҫаба халыҡ һаны 44 мең самаһына арта.

1989 йылдан 2002 йылға тиклем республиканың төньяҡ-көнбайыш 8 районында башҡорт халҡы 4,0 меңгә арта һәм уларҙың яртыһы ике сиктәш районға: Балтаҫҡа (11,8 мең) һәм Борайға (11,3 мең) тура килә. Башҡа районларҙа, 3,9 мең һәм 4,8 мең кешегә артҡан Краснокама менән Тәтешленән тыш, аҫаба халыҡ һаны һиҙелерлек булмай: 1,7 меңдән (Яңауыл районы) 2,3 меңгә (Ҡалтасы) тиклем генә.

Республиканың иң иҡтисади юғары үҫешкән төбәге булып 10 ауыл районын үҙ эсенә алған көньяҡ төбәк тора. 1989 йылдан 2002 йылға тиклем бында башҡорттар һаны 24,4 мең кешегә, бигерәк тә Күгәрсен (4,2 меңгә), Ғафури, Стәрлетамаҡ, Ейәнсура (3,5 - 3,6-шар меңгә) районларында артҡан. Ишембай һәм Федоровка районларында башҡорттар һаны бер нисә йөҙ кешегә генә күбәйгән.

Ике иҫәп алыу араһында башҡорт халҡы 23,2 мең кешегә артҡан Урал төбәгендә Әбйәлил (5,1 мең), Учалы (5,7 мең), Хәйбулла (5,9 мең) районлары айырылып тора. Ә Белорет районы - республикала башҡорт халҡы кәмегән (649 кешегә) берҙән-бер ауыл районы була.

Төньяҡ-көнсығыш төбәктең биш районында 1989 - 2002 йылдарҙа башҡорттар 9,8 меңгә, шул иҫәптән Балаҡатайҙа - 927, Дыуанда - 1000, Ҡыйғыла - 1,4 мең, Мәсетлелә - 2,9 мең, Салауатта 3,5 мең кешегә арта.

Урал-Волга буйында ғына түгел, бөтә губерна Рәсәйендә Башҡортостандағы тиклем татарҙар йәшәгән, Татарстанды (990,7 мең кеше) иҫәпләмәгәндә, бер генә край ҙа, бер генә өлкә лә, бер генә республика ла юҡ. Башҡортостан татарҙар һаны буйынса уларҙың этник тыуған иленән генә артта ҡалып, элекке СССР-ҙың союздаш республикаларын (РСФСР-ҙан башҡа) һәм Рәсәй Федерацияһының хәҙерге субъекттарын күпкә уҙып китә. Илдең уның менән сиктәш булған дүрт төбәге - Свердловск, Ырымбур, Силәбе өлкәләрендә, Удмурт Республикаһында татарҙар Башҡортостандағыға ҡарағанда бер ярым тапҡырға әҙерәк. Һуңғы Бөтә союз халыҡ иҫәбен алыу 13 союздаш республикала бергә (Украина, Ҡаҙағстан, Грузия, Әзербайжан, Литва, Латвия, Молдавия, Ҡырғыҙстан, Таджикстан, Әрмәнстан, Төркмәнстан, Эстония) 720,4 мең татарҙы иҫәпкә ала, был һәр дүртенсе кешеһе татар милләтенән булған Башҡортостандағынан 400 меңгә әҙерәк.

1989 йылдан 2002 йылға тиклем (ике иҫәп алыу араһы) республикала татарҙар һаны 130 мең кешегә - төньяҡ төбәктең Благовар, Туймазы (8,6 - 8,9 мең), Илеш, Йәрмәкәй, Дүртөйлә (6,0 - 6,6 мең) районларында - кәмей. Республиканың үҙәк төбәгендә өс район: төбәктең биш районында (Архангел, Бөрө, Благовещен, Мишкә, Нуриман) бергә алғандағы ҡарағанда татарҙар Кушнаренкола бер ярым тапҡырға күберәк кәмей, ә инде Шишмә һәм Өфө районларында, киреһенсә, татар халҡы кәмемәй, 271 һәм 2,9 мең кешегә арта.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Нисек кенә булмаһын, Башҡортостан - күп милләтле край. Унда электән милләт-ара татыулыҡ хөкөм һөрә, үҙ-ара ихтирамға, төрлө халыҡтарҙың мәҙәни-рухи алмашыуына нигеҙләнгән үҙенсәлекле милләт-ара климат барлыҡҡа килгән.**

**Мөхәмәт МЫРҘАБУЛАТОВ, тарих фәндәре кандидаты.**
**(Аҙағы).**

*ПРЕЗИДЕНТ БЛОГЫНАН*




# ТАРИХЫН ТАНЫТАСАҠ ӘЛЕ

## Башҡорт ҡалаһы

**Республика Президенты Рөстәм Хәмитов Өфө-II ҡаласығына килеп, ғалимдар менән аралашҡандан һуң, төрлө сәбәптәр арҡаһында быға тиклем йәмәғәтселек иғтибарынан ситтә ҡала килгән был археологик ҡомартҡы һуңғы ике аҙнаның иң мөһим хәбәрҙәренең береһенә әйләнде. Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитовтың блогында ла Өфө-II ҡаласығы тураһында бәхәстәр ҡыҙыу бара. Республика халҡы боронғо ҡала тураһында нимә уйлай? Уларҙың бер нисәһен уҡыусыларыбыҙ иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.**

**aidar23:** "Президенттың тәбиғәт ҡомартҡыларына иғтибар итеүе ҡыуандыра. Өфө-II ҡаласығына килгәндә, бик яҡшы башланғыс. Күптәр иҫбатлауынса, башҡорт халҡы халыҡ буларак XVI-XVII быуаттарҙа ғына барлыҡҡа килмәгән. Халҡыбыҙҙың 2 500 йыллыҡ тарихы бар, "Гилгәмеш", "Урал батыр" кеүек тарихи ҡомартҡылар бөйөк цивилизацияларҙа ғына булған. Тарихи Башҡортостан территорияһында Өфө-II кеүек ҡаласыҡтар 400-ҙән ашыу икәнен һәм урыҫ батшаларының ҡәлғәләрҙе бер ҡасан да буш урында төҙөмәгәнен оноторға ярамай..."

**al_e_k_sa:** "Ә боронғо башҡорт ҡалаһы Арҡайым? Был ҡала урынында алып барылған ҡаҙыныу эштәре башҡорт халҡының тамырҙары менәр йылдарға боронғарак китеүен иҫбатланы ла инде. Тик федераль каналдарҙан Арҡайымды боронғо урыҫ цивилизацияһы тип һөйләүҙәре генә оҡшап етмәй..."

**texas_74:** "Өфө-II ҡаласығы урынында музей булыуы яҡшы. Иң мөһиме - Башҡортостан Президентының ғалимдарҙы хуплауы. Боҙ ҡуҙғалды. Ҡаҙан бер тәңкә менән генә лә ҡалаға 1000 йәш икәнлеген дәлилләй алды. Ә беҙҙә стеналары, биҙәнеү әйберҙәре, һауыт-һабаһы һаҡланған тотош ҡаласыҡ! Киләсәктә Өфөгә 1500 йәш тип рәсми рәүештә һөйләй алырбыҙ, тип ышанам".

**bulgalo:** "Өфөнөң боронғо тарихы тураһында һөйләгәндә, ҡалабыҙҙың тарихи үҙәгендә, Каруанһарай эргәһендә урынлашҡан тарихи биналарға ла иғтибар итһәк ине. Баш ҡалала XVIII-XX быуатта төҙөлгән йорттар юҡҡа сығып бара, уларҙың күбеһе һүтеп ташлана, ҡайһыларына реконструкция һәм ремонт талап ителә. Иҫке Өфөнө лә килемле туристик проект итеп ҡулланып була. Ә музей проектына килгәндә, ни өсөн яңып юҡҡа сыҡҡан Өфө Кремлен өлөшләтә булһа ла реконструкцияламаҫҡа?"

**aidar23:** "...бер кем дә боронғо Өфө-II ҡалаһын башҡорттар төҙөгән тип әйтмәй. Уны һундар, сарматтар, төрки халыҡтары, йәғни беҙҙең ата-бабалар төҙөгән һәм әгәр ҙә беҙ бөтәбеҙ ҙә бөгөн үҙенең цивилизацияһы булған боронғо халыҡтар көн күргән Башҡортостан территорияһында йәшәйбеҙ икән, бының менән һоҡланырға һәм ғорурланырға ғына кәрәк. Шулай уҡ беҙҙең был халыҡтарҙы үҙебеҙҙең ата-бабаларыбыҙ тип иҫәпләргә тулы хоҡуғыбыҙ бар.

Һеҙ Мәскәүҙә рус милләте вәкилдәре төҙөгән тип уйлайһағыҙ, яңылышаһығыҙ. Шул иҫәптән, Ҡаҙанды ла татарҙар түгел, ә төркиҙәр төҙөгән. Ошоларға бәйле, Өфө-II ҡалаһын башҡорттарҙың ата-бабалары төҙөмәгән, тигән һүҙҙәрегеҙ ысынбарлыҡҡа тура килмәй".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был яңылыҡҡа ҡараштарҙың киреһе лә, ыңғайы ла бар, ул шулай булырға тейеш тә. Рөстәм Хәмитов та был турала бына нимә ти: "Өфөгә 1500 йәш. Ул да ҡыҙыу бәхәстәр тыуҙырҙы. Әлегә ҡыҙырға ярамай. Сөнки хәҡиҡәтте бары тик тарих һәм археология мәсьәләрендә компетентлы булған кешеләр генә билдәләй ала. Өфөнөң йәше тураһында ғилми фекер алышыу мотлаҡ буласаҡ һәм унда иң алдынғы ҡарашлы Рәсәй һәм сит ил ғалимдары ла саҡырыласаҡ. Йәмәғәтселектең дә фекере тыңланыласаҡ. Аргументтар йыя башлағыҙ. Тик хис-тойғоларҙы ситкә ҡуйып торорға. Академик Мәжитовтың эшенә оло ихтирам менән ҡарайым. Уның һәм коллегаларының эшмәкәрлеге билдәле булмаған күп факттарҙы асыҡланы. Был ысын фән!. Бынан тыш, ҡала уртаһында, хаҡы буйынса ер иң ҡиммәтле урында археологик ҡаҙыу эштәре алып барыуға хоҡуҡ яулау өсөн характер, ихтыяр көсө һәм һөҙөмтә буласағына ышаныс та кәрәк. Хәйер, фәндә бөйөк асыштар шулай тыуа ла инде".**

*✓ Һәр милләт вәкиле үҙенекен яҡын күрә, һәм был хәл тәбиғи. Яңыраҡ Эстонияла атташе булып эшләүсе башҡорт егетенең Башҡортостанға ҡайтып башҡорт ҡыҙына өйләнеп, кире хеҙмәт урынына китеүе хаҡында ишеттем.*



**Баш ҡалабыҙ урамдарында йөрөүсе маршрут автобустарында, трамвай-троллейбустарҙа "Киләсәгебеҙ - уҡытыусылар ҡулында" тигән яҙыуҙарҙы йыш осратырға тура килә хәҙер. Рәсәйҙә 2010 йыл - Уҡытыусы йылы итеп иғлан ителде, шуға күрә лә яҙалар был һүҙҙәрҙе, тип тә аңлатырға булыр ине. Әммә төптәнерәк уйлап ҡараһаҡ, был һүҙҙәрҙең дежур плакат һүҙҙәре түгеллегенә лә төшөнәбеҙ. Ни өсөн тигәндә, хәҙер Рәсәй халҡының киләсәген ысын мәғәнәһендә ҡайғыртыусы һәм фиҙаҡәрлек күрһәтеүсе булып, әлегә хосусилаштырылмайынса бары мәктәп кенә тороп ҡалды. Улай ғына ла түгел, мәктәптәр хәҙерге ваҡытта күп кенә ауылдарҙы тарҡатмай һаҡлап килеүсе терәк-таяныс та булып тора. Мәктәп тигәндә, беҙ иң тәүҙә уҡытыусыны күҙ алдына баҫтырабыҙ. Мәктәпһеҙ уҡытыусы булыуы мөмкин, әммә уҡытыусыһыҙ мәктәп булмайҙыр. Икенсе мәсьәлә - уҡытыусыларҙың да төрлөһө була: ысындары, был һөнәрҙә осраҡлылары, ваҡыт үтһен, сабата туҙһын, тип йөрөгәндәре, башҡа эшкә барымы булмауы арҡаһында уҡытыусылыҡты һайлағандар, һ.б. Ә бына Хәмиҙә Әбүбәкер ҡыҙы Барлыбаеваға килгәндә, мин уны уҡытыусыларҙың уҡытыусыһы тип атар инем. Яҙмышы уны яртылаш хәрәкәтһеҙ ҡалдырып, яҡты донъяны күреүҙән мәхрүм иткән хәлдә лә, ул үҙ һөнәренә, кешелек принциптарына, милли рухыбыҙға тоғро булып ҡалған. Быйыл йәй Баймаҡ районы Йомаш ауылында -уның тыуған ауылы мәктәбендә юбилей кисәһе булып үткән. Гәзиттең был һанында беҙ уның тормош юлын тағы ла бер ҡат хәтере аша үткәреп яһаған әңгәмәһен һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итәбеҙ.**

# КҮҘҘӘРЕ КҮРМӘҺӘ ЛӘ...

## күңел күҙе үткер күрә

### Иң бәхетле мәлдәрем

Атай-әсәйем, туғандарым менән бергә атай йортонда йәшәгән йылдарым ғүмеремдең иң бәхетле мәлдәре булып күңелемә уйылып ҡалған. Асыҡҡан саҡтар ҙа, ағайҙарымдың кирза итектәрен кейеп, таптыр-топтор йөрөгән саҡтар ҙа булды. Атайым менән ҡырҙа ҡолас киреп бесән сапҡан саҡтарҙы ла оноторлоҡ түгел. Ҡырау төшкән мәлдә иртәнсәк көтөүгә яланаяҡ һыйыр ҡыуған саҡтар ҙа иҫтә ҡалған. Ҡырау аяҡты өшөтә бит инде, шуға күрә малды йүгертеп ҡыуып барабыҙ ҙа, ҙур ялпаҡ таштарға баҫып, табандарҙы йылытып алабыҙ. Бер аҙ баҫып торабыҙ ҙа, киләһе ташҡа күҙ ташлап, тағы ла алға йүгерәбеҙ. Элек игенде молотилка менән һуғалар ине. Ул саҡта Халис Килдеғошовтың атаһы Минәхәт ағай менән әсәһе Гөлсирә апайҙың бер-береһен ятатышып йөрөгән саҡта молотилка эргәһендә йылмайышып-көлөшөп фотоға төшкәне иҫемдә ҡалған. Кеше күңеленең матурлыҡҡа, романтикаға тулы булған йәмле һәм күңелле мәлдәр ине ул йылдар.

Мин тәбиғәтем менән бик етди инем, буғай. Класта ҡыҙҙарҙың сәсенән бер-бер артлы тартып илатып килгән малайҙар, минең тапҡырға еткәс, шып итеп туҡтай ҙа ҡуя торғайнылар. Алтынсыла уҡығанда уҡытыусыбыҙ Роза Булатовна Ильясованың ире Әмир ағайҙы фалиж һуҡты. Тап шул саҡта клубта "Тимур һәм уның командаһы" тигән фильм күрһәттеләр. Клубтан уҡытыусыбыҙҙың күҙенә йәш алып сыҡҡанын күрҙек тә, класыбыҙ менән йыйылып, уға ярҙам итергә, нисек булһа ла хәлен еңеләйтергә булдыҡ. Бер төндә егеттәр һәм ҡыҙҙар бер нисә бысҡы, балта алып, уҡытыусыбыҙға һиҙҙермәй генә йорттары янына килтереп ауҙарылған бер машина утынды бысып, ярып ташланыҡ. Теге фильмда ла шуға оҡшаш сюжет бар ине. Иртәгәһенә уҡытыусыбыҙҙың йөҙөндә йылмайыу осҡонон күреп, эй ҡыуаныуыбыҙ! Ысынлап та, совет осоро тип тәнҡитләһәләр ҙә, ул саҡта кешеләр араһында ошондай йылы, самими мөнәсәбәттәр бар ине барыбер. Кешеләр бер-береһенә яҡшылыҡ эшләргә атлығып тора ине. "Кемгә яҡшылыҡ эшләһәң, шул кеше һинең күңелеңдә яҡшы булып иҫтә ҡала", ти Хәлил ағайым. Бик тәрән фәлсәфә бар бында. Тимәк, икенсе кешеләрҙең яҡшы булыуы ла һинең үҙеңдән тора икән.

### Кумирҙарым

Урыҫтар: "Үҙеңә кумирҙар яһама", - тип әйтһә лә, йәш саҡта кемгәләр оҡшарға тырышыу тойғоһоноң ыңғай яҡтары ла күптер. Хәйер, яҡшы кешегә оҡшарға тырышыуҙың яҙығы бармы икән? 25 йәшемдә минең кумирҙарым атайым, Хәлил ағайым, тәүге директорым Рим Әшрәф улы Сырлыбаев, синыф етәксеһе Роза Булат ҡыҙы Ильясова, пединституттағы кураторым Анатолий Александрович Горохов булды. Ошо кешеләр миңә шәхес булырға ярҙам итте һәм мин уларҙың иң яҡшы сифаттарын үҙемдә тәрбиәләргә тырышыуым һөҙөмтәһендә тормошомдағы күп кенә ауырлыҡтарҙы еңеп сыға алдым. Оло юлға сыҡҡанымда юл башымда атайым дәртләндереп торһа, иң ауыр саҡта таяныр кешем Хәлил ағайым булды. Кураторым Анатолий Александровичтан мин бөхтәлекте, теүәллекте алырға тырыштым. Ул беҙгә мәғлүмәтте, ғилемде ҡағыҙға йә таҡтаға яҙып хәтергә һеңдерергә өйрәтте. Роза Булат ҡыҙы менән Рим Әшрәф улы мине үҙ эшемә яуаплы ҡарарға өйрәтте.

### Йәшәү мәғәнәһе

Үкенес, кеше йәшәү мәғәнәһе хаҡында йәшәүенең мәғәнәһен, һаулығын, туғандарын, дуҫтарын, ғүмеренең ҙур өлөшөн юғалтҡас ҡына уйлана башлай шул. Ә бына Советтар Союзы юҡҡа сыҡҡас, беҙ барыбыҙ бер юлы йәшәү мәғәнәһе хаҡында уйлана башланыҡ. Сөнки илебеҙҙе, элеккесә, үҙебеҙ өйрәнгән йәшәү рәүешен юғалттыҡ. Мин дә ул саҡта көндәлек, аҙналыҡ, айлыҡ, йыллыҡ план ҡороп, барыһына өлгөрөр өсөн бар урында ла диагональ буйынса йөрөй торғайным. "Минең ата-әсәйем башланғыс мәктәпте генә бөткән икән, мин мотлаҡ юғары белем алырға тейешмен, ә минең балам минән дә бейегерәк үрҙәрҙе яуларға тейеш" - шулай булды ул саҡта күптәребеҙҙең йәшәү маҡсаты. Ғөмүмән, "тейеш" һүҙе шул Советтар Союзы мәлендә барлыҡҡа килгәндер ул. Беҙҙең алдағы яҡты киләсәккә юл шул "тейеш" тигән маяҡтарҙан ғына тора ине шул. Ул саҡта хөкүмәт ауылда бер һыйыр ғына тоторға рөхсәт итте, кешеләр байып, капиталист булып китмәһендәр, тип ҡурҡҡандарҙыр инде. Атайым: "Һуңғы һыйырымды һуйып һатһам-һатам, һин, ҡыҙым, уҡып сығырға, башҡа туғандарыңа юл ярырға тейешһең", - тип маҡсат ҡуйҙы алдыма. Атай-әсәйебеҙ беҙгә, үҙҙәренең 9 балаһының барыһына ла юғары белем бирҙе.

90-сы йылдарҙа идеалдарыбыҙ емерелеп, барлыҡ маҡсаттарыбыҙ, партия, комсомол, пионер, октябрят ойошмалары юҡҡа сыҡҡас, ысынлап та, йәшәүемдең мәғәнәһе юғалды. Ал-ял белмәй, туплаған бер "Жигули"лыҡ аҡсама бер сандали ғына һатып ала алдым. Ҡайҙа барып һуғылырға белмәй, төртәләнеп йөрөгәндә бер дин әһеленә барып: "Ҡайҙа ул Аллаһы Тәғәлә? Ул ҡайҙа? Ниңә ул донъялағы ошондай мәхшәрҙәргә юл ҡуя?" - тигән һорауҙар бирҙем. Ул саҡта мин Магнитогорск ҡалаһында урындағы башҡорт милли ойошмаһы етәксеһе инем. Ҡалалағы башҡорт балаларын милли мәҙәниәтебеҙгә ылыҡтырыу саралары ойоштороуға, йәштәрҙе милли мөхиткә йәлеп итеүгә әйләнде йәшәү маҡсатым. Магнитогорскиҙа башҡорт милли мөхитен булдырыу өсөн байтаҡ эштәр башҡарҙыҡ.

*Минең ситтә йәшәгән алыҫ туғаным, мин бәхетһеҙлеккә осрағандан һуң 4-5 йыл үткәс: "Үлмәгәнме ни һаман Хәмиҙә?"- тигән. Шул саҡта күҙҙәремдән йәш сыҡҡансы рәхәтләнеп, хатта шатланып, туҡтай алмай оҙаҡ ҡына көлдөм. Әле лә көләм, сөнки күптән үлергә тейеш кеше һаман да йәшәп ята икән, тимәк, уны тормошта ниндәйҙер көс тота, йәшәтә һәм ярҙам итә. Шуға күрә лә мин баштараҡ псевдоним аҫтында радионан сығыш яһаһам, гәзиткә мәҡәлә бирһәм, хәҙер инде мин үҙ исемемде йәшермәйем. Бының менән: "Мин үлмәнем әле, иптәштәр!" - тип белдерергә теләйем.*

### Күҙем күрмәгән көйгә лә…

90-сы йылдарҙа илемде һәм идеалдарымды емергән тормош машинаһы 1998 йылда үҙемде автомобиль һәләкәтенә тарытты, физик яҡтан юҡ итә алмаһа ла, киләсәккә инаныуҙарымды, рухымды һүндерергә самаланы. Әммә яңылышты тормош машинаһы. Хәҙер, күҙем күрмәгән көйгә лә, хәрәкәттәрем сикләнһә лә, йәшәү мәғәнәмде юғалтманым. Элек тормош буйлап диагональ йөрөһәм, хәҙер бүлмә буйлап шул уҡ хәрәкәттәрҙе ҡабатлайым. Бик күп тапҡырҙар төрлө дауаханаларҙа ятырға тура килде. Шул саҡтарҙа бергә ятҡан әбейҙәрҙән бик күп кенә доғалар ятлап алдым. Уларҙы һөйләп, күңел тыныслығы таптым. Кеше ғүмер тауының башына менеп етеп, кирегә төшкән ваҡытта үҙ асылына ҡайта бара икән. Ошо хәлгә тарыуым мине ҙур тормошта ҡатнашыу мөмкинлегенән айырҙы, әммә Аллаһы Тәғәләгә, асылыма яҡынайтты.

Минең ситтә йәшәгән алыҫ туғаным, мин бәхетһеҙлеккә осрағандан һуң 4-5 йыл үткәс: "Үлмәгәнме ни һаман Хәмиҙә?"- тигән. Шул саҡта күҙҙәремдән йәш сыҡҡансы рәхәтләнеп, хатта шатланып, туҡтай алмай оҙаҡ ҡына көлдөм. Әле лә көләм, сөнки күптән үлергә тейеш кеше һаман да йәшәп ята икән, тимәк, уны тормошта ниндәйҙер көс тота, йәшәтә һәм ярҙам итә. Шуға күрә лә мин баштараҡ псевдоним аҫтында радионан сығыш яһаһам, гәзиткә мәҡәлә бирһәм, хәҙер инде мин үҙ исемемде йәшермәйем. Бының менән: "Мин үлмәнем әле, иптәштәр!" - тип белдерергә теләйем.

### Ҡатнаш никахтар мәсьәләһе

Ғаилә ҡорорға ла өйрәтеү тәрбиәгә һалынырға тейеш. Был йәһәттән тәрбиәнең бушаҡ ҡуйылыуы ҡатнаш никахтарға килтереүҙең бер сәбәбе булып тора. Бына Өфөлә генә минең күп таныштарымдың ҡыҙҙары кейәүгә сыға алмайынса ҡырҡтары тулып килә. Улар урыҫ телле мәктәптәрҙә уҡый һәм шул мөхиттең тәрбиәһендә үҫеп, һуңынан яңғыҙ тороп ҡала. Сағыштырыу өсөн ҡалалағы башҡорт мәктәп-гимназияларында уҡыусы йәштәрҙе күҙ уңынан үткәрҙем. Һуңғы йылдарҙа уларҙың барыһы ла тиерлек үҙебеҙҙең милләт вәкилдәре менән ғаилә ҡорған. "Ояһында ни булһа, осҡанында шул булыр", тигән мәҡәл бына ошонда сағыла ла инде. Үзбәкстанға барғайным. Унда Ҡырым татарҙары егеттәре бары тик Ҡырым татарҙары ҡыҙҙарын эҙләп табып өйләнә, Ҡаҙан татарҙарына түгел. Ҡыҫҡаһы, һәр милләт вәкиле үҙенекен яҡын күрә, һәм был хәл тәбиғи. Яңыраҡ Эстонияла атташе булып эшләүсе башҡорт егетенең Башҡортостанға ҡайтып, Ейәнсуранан башҡорт ҡыҙына өйләнеп, кире хеҙмәт урынына китеүе хаҡында ишеттем. Был - юғары рухлы һәм мәҙәниәтле башҡорт егетенең үҙ милләтен һаҡларға яһаған аҙымы. Бындай миҫалдар бар, әммә һирәк. Әгәр ҙә һинең улың йә ҡыҙың башҡа милләт вәкиле менән ғаилә ҡороп, башҡа милләт-

тең һанын арттырыуға хеҙмәт итә икән, улар хет Американың президенты булһын, барыбер йәшәүендең мәғәнәһе юк. Ҡулайлы йәшәү шарты өсөн генә кеше үҙ милләте принциптарынан баш тарта икән, ундай кеше үҙ ата-әсәһен хөрмәт итмәй.

Йәһүдтәр балаларына 14-15 йәш тула башлаһа, бер-берәһенә ҡунаҡҡа йөрөшә башлай. Ҡунаҡҡа йөрөшеүҙәренең төп маҡсаты ла балаларын бер-берәһе менән таныштырыу, ҡауыштырыу. Беҙ ҙә ҡунаҡҡа саҡырышырға яратабыҙ, тик был осраҡта, ниһәләр, бындай маҡсат ҡуймайбыҙ.

### Әйҙә, тигән ергә...

Үҙенде ниндәйҙер рамкаларға индереүҙән дә зыянлыраҡ ғәмәл юҡтыр ул. Минә бер алсаҡ ҡына һөймәлекле башҡорт ҡыҙы килеп йөрөгәйне. Үҙе әүҙем тормош менән йәшәне, бар урынға ла өлгөрөп, төрлө конкурстарҙа ҡатнашты. Шул ҡыҙ дин юлындағы бер егеткә ғашиҡ булып, шуға ярайым, тип, йомоҡ ҡына кешегә әйләнде лә ҡуйҙы. Интеллектуаль яҡтан үҫеше лә туҡталды. Хәҙер ул бер ҡайҙа ла йөрөмәй, кешеләр менән аралашмай, мосолманса кейенеп, күп ваҡытын өйөндә генә ултыра. Уның дингә килеүен хуплаһам да, былай итеп үҙгәреүен һис тә хупламайым. Әгәр ҙә дин кешенең һәләттәрен үҫеүҙе сикләй икән, мин бында диндең үҙен түгел, ҡалып-сиктәрҙе күрәм. Ғөмүмән, дингә килеүсе кеше бының менән кемгәләр оҡшарға ғына теләй икән, быны монафиҡлыҡ һанайым. Дингә килеүҙең төп мәғәнәһе - Аллаһы Тәғәләнең берҙән-бер илаһ булыуын таныу һәм дин ҡағиҙәләре буйынса йәшәү бит, ә кемгәләр оҡшар өсөн был юлды һайлау түгел. Реклама агенты булып эшләй ине ул ҡыҙ, бер аҙҙан эшендә лә проблемалар барлыҡҡа килде.

Йәйы сыҡҡанда дин тураһында ла күптән уйлап йөрөгән фекерҙәремде әйтеп үтәйем. Матур, аңлайышлы, фәһемле итеп башҡорт телендә барлыҡ республика мосолмандарына вәғәз һөйләүсе дини етәксене көтә мосолмандар. Әлбиттә, вәғәздәр һөйләнелә, әммә күбеһе татар телендә. Ошондай рухи етәксе булмайынса тороп, дингә килгән йәштәребеҙ тырам-тырағай секталарға, төркөмдәргә бүленеүен дауам итәсәк.

Ниндәйҙер һәләте булған баланы йәлләргә ярамай, шул һәләтен үҫтереү өсөн барыһын да эшләргә кәрәк. Хеҙмәт һалмай, тырышмай тороп, ҡоро һәләт менән генә бер нәмә лә эшләп булмай. Ҡыҙым менән кейәүемә һәр ваҡыт: "Әйҙә, тигән ергә барығыҙ, әгәр ҙә килеп сыҡмаһа, һеҙҙең башығыҙға берәү ҙә һуҡмай бит", - тип әйтеп киләм. Былар минең үҙемә заманында бик аҡыллы өйрәткән кеше булманы. Беҙҙең гимназияларҙа, интернат-мәктәптәрҙә уҡыусылар мине ғәфү итһен, әммә беҙҙә һаман түпәләп тәрбиәләү ысулы дауам итә. Һеҙәмтәлә бындай уҡыу йорттарында иң юғары етәкселек кимәлендә күтәрелгән шәхестәр сыҡмай, иң күбеһе урта звено етәкселәр. Былар барыһы ла нимә тураһында һөйләй һуң? Әйе, беҙҙә әлегә киләсәктә ҙур етәксе, шәхес тәрбиәләй торған милли тәрбиә мәктәбе юҡ. Беҙ күбеһенсә балаларға белем биреүҙе беренсе урынға ҡуйып, уларҙан иң тәүҙә шәхес тәрбиәләргә кәрәклеген иҫебеҙҙән сығарабыҙ.

### Баҙнатһыҙлыҡ

Баҙнатһыҙлыҡ сифаты сит кешеләр тарафынан тыйнаҡлыҡ, күркәмлек, иплелек, баһымсаҡлыҡ булып тойолһа ла, баҙнатһыҙ кешенең үҙенә зыян ғына килтерәләр ул. Тап шул сифат арҡаһында күбебеҙҙең тәбиғәт тарафынан һалынған һәләттәре асылмай ҡала. Асылмаған һәләт кеше менән бергә "ҡәбер"гә китә. Ярай, әгәр ҙә ул һәләт уның үҙенеке генә булһа, ул бит милләттекелә. Был - беҙҙең тәрбиәнең етешһеҙ яғы һәм тап шул етешһеҙлек беҙҙең быуын кешеләренә айырыуса хас булды. "Баҙнатһыҙлыҡ" комплексын бик һирәктәр генә емереп сыға, үҙ-үҙҙәрен оло донъяла раҫлай һәм тәбиғи һәләтен балҡыта алды.

1967 йылда Өфөлә 1-се интернат-мәктәпте тамамлағас, черчение уҡытыусыбыҙ Әхмәт Рәхим улы минә Мәскәүгә Архитектура институтына барырға кәңәш биргәйне. Тәүҙә беҙҙе уҡытабыҙ, тип осон-осҡа ялғаған ата-әсәйемдәрҙе уйлап, икенсенән, киләсәгемде врач йәки уҡытыусы һөнәрендә күҙ алдына килтереү арҡаһында мин уҡытыусымдың кәңәшен тотманым. Тап шул йылда Хәлил ағайым Мәскәү дәүләт университетына уҡырға ингәйне, ул ҡалала үҙемде яңғыҙ ҙа тоймаҫ инем. Хәҙерге аҡылым менән уйлаһам, шул баҙнатһыҙлығым арҡаһында мин тормош юлымдың шундайын мөмкинлегенән мәхрүм ҡалғанымды аңлайым. Кем белә, бәлки, мин был юл менән китһәм, күберәккә өлгәшә алыр инем, кем белә, бәлки яҙмышым бөтөнләй башҡаса, булып, мин әлеге хәлемә ҡалмаған да булыр инем. Бынан ниндәй һығымта яһарға була: баҙнатһыҙлыҡ кешенең яҙмышын да дөрөҫ юлынан тайпылдыра ала икән. Баҙнатһыҙлыҡ сифаты хәҙерге уҡытыусыларыбыҙҙың үҙҙәрендә лә бар, дөрөҫөрәге, уларҙың күптәренә инфантиллек хас. "Ярамағанмы ни беҙгә, башҡорттарға, беҙгә Сибай ҙа, Өфө лә еткән", тигән ҡараш менән йәшәүселәр әле булһа ла бар.

Өфөнән районға ҡайтып эш башлағас, Рим Әшрәф улы минә комсомол райкомына эшкә барырға тәҡдим итте. "Әле мин унда эшләр кимәлгә күтәрелеп етмәгәнмен әле", тип, унда барыуҙан баш тарттым. Һуңынан ҡараһам, унда үҙемдән күпкә әҙерлекһеҙ булған ҡыҙҙарҙың эшләп йөрөүен күрҙем. Үҙ-үҙемде түбән баһалауым арҡаһында үҙ-үҙемә юлды яптым шул саҡта. Был бер минең генә миҫалым, ә ошондай баҙнатһыҙлыҡ арҡаһында күпме милли интеллигенция вәкилдәренең карьера баҫҡысы буйынса үҫә алмай, үҙ кимәленән түбән булған урындарҙа ултырып ҡалғанын беләм.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**

*АТАЙ ҺҮҘЕ*

# УНЫҢ ЙӘШӘҮ РӘҮЕШЕ -

## бирешмәҫ рух, ныҡлы тәүәкәллек өлгөһө

**ҺОРАУ: Атайығыҙҙан ниндәй ир тәрбиәһе алдығыҙ, улдарығыҙға ниндәй ир тәрбиәһе бирәһегеҙ?**



**Атайым Байымов Рәсих хажи Әхмәтҡаҙы улы рухи яҡтан да, физик яҡтан да көслө кеше булды. Баймаҡ ҡала-районының баш ер бүлеүсеһе вазифаһын башҡарҙы. Баймаҡ ҡалаһында йәшәһә лә, тамырҙары береккән Байым ауылынан айырылманы, беҙҙе лә шул ауыл кешеләре итеп тәрбиәләне. Йәй етеү менән быуындан-быуынға мираҫ булып ҡалған ата-бабаларыбыҙ ерендә бесән саптыҡ. Береһенән-береһе шуҡ, шаян дүрт малайҙы ауылға алып ҡайтып, атайсал һауаһын һулатып, шишмә һыуын тәмләтеп, ҡан-ҡәрҙәштәр менән аралаштырып тороуында тамырҙарҙы тойҙороп үҫтереү ынтылышы ятҡан, күрәһең.**

Ул етәксе кешегә хас булған стереотиптарҙан азат кеше ине. Етәксе булһа ла, ябай ҡул эшенә өҫтөнлөк бирҙе. Уның бесән сабыуы, беҙҙең менән ҡул бысҡыһы ярҙамында утын бысыуы һәм башҡа эштәрҙе рәхәтләнеп башҡарыуы ошо хаҡта һөйләй. Алтын ҡуллы, эшсән булыуы беҙҙең өсөн өлгөләрҙең дә өлгөһө булды. Биш йәшебеҙҙәсә мутлыҡтарыбыҙ өсөн сыбыҡ осон да эләктергеләй ине. Бөләкәй саҡтағы "арт һабаҡтары" - сыбыҡтың тәьҫире ул ваҡыттарҙа әйтелгән нәсихәттәргә ҡарағанда ла көслөрәк булды. Мәктәп йылдарында барыбыҙҙың да уҡыуы менән ҡыҙыҡһынды. Балаға ата-әсәһе тарафынан иғтибар етерлек кимәлдә булһа, ул үҙен иркен тота. Атайлы бала - арҡалы бала бит инде.... Барыбыҙға ла ышаныс өҫтәй белде атайыбыҙ.

Беҙҙең атайыбыҙҙың йәшәү рәүеше - бирешмәҫ рух, ныҡлы тәүәкәллек өлгөһө. Уның характерында ни өсөн был һыҙат өҫтөнлөк итә? Мөхтәр исемле иң өлкән ағаһының бер ғәйепһеҙгә репрессия ҡорбаны булыуы, атаһы Әхмәтҡаҙының мулла булыуы арҡаһында төрмәгә ябылыуы "халыҡ дошманы балалары" мөһөрө менән йәшәргә мәжбүр итә уларҙы. Бындай шарттарҙа күптәр "һына". Атайыбыҙ бирешмәй - сынығыу ғына ала. Зирәклеге арҡаһында Свердловск ҡалаһында юғары уҡыу йортон тамамлай, районына ҡайтып, ең һыҙғанып эш башлай.

Буш ваҡытында ваҡытлы матбуғатты гел ҡарап бара ине. Донъя хәлдәре менән хәбәрҙар булыуы олатайымды хәтерләтә. Атайымдың бер туған һеңлеһе Хөснә апайым әйтеүенсә, олатайым Әхмәтҡаҙы мулла ғәрәп, фарсы телдәрен яҡшы белгән. Ул радионан шәреҡ ҡаналдарын тыңлап, донъя хәлдәрен балаларына ла һөйләп ултырыр булған. Тимәк, атайыбыҙҙың уҡымышлы, айыҡ аҡыллы булыуы, һис шикһеҙ, атаһы биргән ир тәрбиәһенән киләә. Был - хәҡиҡәт. Тимәк, быуындар сылбыры кешене көслө итә.

Олоғайған кешене, ғәҙәттә, ниндәйҙер яңы аҙымға күндереүе ҡыйын. Кеше күңел тыныслығы эҙләүсән. Хаҡлы ялға сығып, күп тә үтмәне, атайыбыҙ "картатайҙар төйәгенә ҡайтып йәшәйем", тип, бөтәбеҙҙе лә хайран итте. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә Байымда буранан өй һалып инеп, әсәйебеҙ менән ауылға ҡайттылар. Беҙ, уландары, уларға был эштә ярҙам иттек. Бөтә уңайлылыҡтары булған фатирҙарын һатып, ауыл мәшәҡәттәренә күмелеп, урман ситендәге ыҡсым өйҙән йәм, тыныслыҡ табып, ҡарт көндәрен шунда үткәреүҙән ләззәт алды улар.

Атайыбыҙға хас булған тәүәкәллек минә лә күскәндер. Беҙ үҙебеҙ ҙә ике ул, бер ҡыҙ тәрбиәләйбеҙ. Өлкән улым Хәкимйән Өфө ҡалаһындағы төҙөлөш колледжен тамамлай, кесе улым Сәлимйән - Сибайҙа сауҙа-иҡтисад колледжында уҡый. Әйткәндәй, малайҙарға исемде олаталары һайланы. Балалар тәрбиәләүҙә баланың ҡыҙыҡһынған мәлен файҙаланып, кәрәкле йүнәлеш бирергә тырышам. Мәҫәлән, бәләкәйерәк саҡтарында бергәләп эш эшләп йөрөгән саҡта, малайҙар бер туҡтамай, "Атай, ә был ни өсөн улай, теге ни өсөн тегеләй?" кеүегерәк һорауҙар яуҙырырға әүәҫ. Ошо ынтылышҡа йүнәлеш кенә биргән, улар дөрөҫ яуапты үҙҙәре таба ла ҡуя. Етешһеҙлектәре өсөн әрләү менән генә ниндәйҙер нәтижәгә килтереү мөмкин түгел. Әгәр ҙә бала аңламай икән, тимәк, аңлатырға ғына кәрәк. Кире осраҡта, ул барыбер ниәт иткән эшен йәшереп булһа ла башҡарып ҡуя. Шуға күрә, сабыр ғына аңлатыу яҡлымын. Был асыл һәр саҡ ярҙам итә.

Атай кеше иң тәүге сиратта шәхес булырға тейеш. Халҡы өсөн генә түгел. Иң тәүҙә балалары алдында лайыҡлы урын биләнен ул, уларҙың күңел түрен яулаһын. Шул саҡта ғына уны үҙ халҡының аҙаматы, тип нарыҡларға була. Сөнки ул - халыҡ киләсәген тәрбиәләүсе. Беренсенән, ысын мәғәнәһендә шәхес кимәленә еткән кеше генә һынылышлы мәлдәрҙә хәл иткес ҡарарҙар ҡабул итә. Икенсенән, айыҡ аҡыл менән йәшәгән атай ғына үҙ балаларына ғына түгел, хатта башҡа туғандарына, дуҫтарына ла юл күрһәтеүсе, терәк-таяныс була ала.

**Ғәни БАЙЫМОВ.**
**Баймаҡ ҡалаһы.**

✓ *Әлбиттә, был хәлдән һуң дивизияла "бабайлыҡ" бөтмәҫ бөтөүгә, әммә һинең үҙ үҙеңә ирек яулап алыуыңа бар һалдаттар таң ҡалған. Һиҙәһеңдер, Колупаевтың һиңә тик уставса ғына мөғәмәләлә булғанын?*






...Биткә һуҡмайҙар, тик ҡорһаҡ, күкрәк тирәләренә, арҡа буйына ҡаты кирза итектәр ныҡ ҡына эләгә. "Дед"-тарҙың ана шулай бик оҫта туҡмауҙары тураһында һөйләгән Хәсән ағаһының әрме мажараларын иҫләне. Йөҙҙәге "синяк" шундуҡ командирҙарҙың күҙ уңына эләгәсәген, һәм "неуставщина" өсөн үҙенең башынан һыйпамаясаҡтарын бик яҡшы белә "дед". Их, әҙ генә байҡамайыраҡ ҡалды шул Тәфтизән. Аңғармаҫтан йығa һуҡтылар. Бының был яғына уяуыраҡ булыр. Был туҡмалыу уға бик яҡшы дәрес булыр... Тик дәрес был хулигандар файҙаһына булмаясаҡ! Һынһаһыныр, әммә Тәфтизән уларға бер ҡасан да баш эймәйәсәк, ә һәр саҡ хәленән килгәнсе ҡаршы торасаҡ! Ҡасандыр әрме хеҙмәтенә алынған төрмәләге тотҡондар аша һалдат казармаларына килеп еткән һәм төҙәлмәҫлек сир булып һаҡланып килгән, әҙәм балаһын кәмһеткән, түбәнһеткән, кешелекһеҙ һәм ҡырағай "дедовщина" тип йөрөтөлгән был "законға" бер ҡасан да буйһонмаҫҡа ҡарар итте ул... "Ыңҡ! Ыңҡ!" тигән генә өндәр сығарҙы ул тәненә көслө тибеүҙәрҙән... Тик башҡа ғына типмәһендәр... Егет ҡулдары ярҙамында мөмкин тиклем башын һаҡларға тырышты...

- Етер, егеттәр, - тине араһындағы берәү, - үлеп ҡуйһа, не дай бог... - Ул ҡалас кеүек йомарланып, ике ҡуллап башын ҡаплап ятҡан егеткә әленән-әле азартланып типкеләгән Колупаевтың бил ҡайшынан тартып туҡтатты.

Йөҙөндә һис бер туҡмалыу эҙе булмаған, ләкин тәндәре әрнеүҙән көскә ҡуҙғалып килгән егетте яңынан стройға ҡуйҙылар.

- Тағы кем "бабайға" үҙенең көсөн күрһәтергә теләй, - тине оҙон буйлы, мыҡты кәүҙәле сержант сафта торған йәш һалдаттарға ҡарап. - Мин бер кемегеҙгә лә бына ошо салаганың хатаһын ҡабатларға кәңәш итмәҫ инем... - Ул мөмкин тиклем рәхимле булып ҡыланды. Әлбиттә, стройҙан тауыш биреүсе булманы...

Ҙур теләк менән, ысын егеттәрсә ил һаҡларға тип хәрби хеҙмәткә килгән башҡорт егетен әрме бына шулай ҡаршы алды. Бер ҙә генә иркәләтмәй икән шул был әрме тормошо. Ғәҙәттә, һәр нәмәне бер аҙ арттырыбыраҡ һөйләргә ятраҡан Хәсән ағаһы бер ҙә бушты һөйләмәгән икән. Шулай ҙа бөгөнгө көндә ул үҙен еңелеүсе итеп тойманы. Үҙенән бер йәшкә генә олораҡ булған "шпинголет" Колупаевҡа баш эймәгәненә, үҙен кәмһетергә юл ҡуймағанына ҡәнәғәтләнеү тойғолары кисереп, отбой командаһы булыу менән үҙенә бирелгән икенсе ярустағы карауатына ятып йоҡлап китте.

Иртәгеһен иртәнге зарядка алдынан иңдәренә медицина лейтенанты погондары таҡҡан батальон табибы ярты билгә ҡәҙәре сисенгән йәш һалдаттарҙы теҙеп ҡуйып, "телесный осмотр" үткәрҙе. Һәр һалдатты ентекләп тикшергән күҙлекле доктор Тәфтизән ҡаршыһында туҡталды.

Рядовой Абдулов! - тип ҡысҡырып, үҙен-үҙе танытты һалдат устав буйынса.

- Та-а-ак, - тип һуҙҙы табиб күҙлеген төҙәтеп кейә-кейә, - кем һине былай бик матур итеп "биҙәне", иптәш Абдулов?

- Был - гражданканан, иптәш лейтенант, - тип, алдан уҡ уйлап ҡуйған яуабын әйтте һалдат. - Армияға оҙатҡанда бер аҙ эләктергәйнеләр...

Ҡан һауған урындарҙың сәғәт элек кенә барлыҡҡа килгәнен белгән тәжрибәле доктор, әлбиттә, йәш һалдатҡа ышанманы, ҙур күҙлектәре аша хәйләле йылмайҙы:

- Неужели?..

- Так точно!

- Шулай икән... - тип үҙенең блокнотына ниҙер яҙып алды ла, артабан рәттәр буйлап китте. Уның артынан бер аҙым да ҡалмай эйәргән Колупаевтың, һалдат ни әйтер икән, тип, тын да алмай торған урынынан иркен итеп һулап ҡуйғаны ишетелде...

Бала саҡтан уҡ ошаҡлаша торған ғәҙәте юҡ Тәфтизәндең. Башҡа берәү аша ишетмәһәләр, үҙен кем һәм ни өсөн туҡмағандарын, әлбиттә, ул бер кемгә лә һөйләмәйәсәк.

* * *

Бер айлыҡ "йәш һалдат курсы", икенсе төрлө әйткәндә, карантин осорона сержант Колупаевты ваҡытлыса Тәфтизәндәрҙең отделение командиры итеп тәғәйенләнеләр. Яҡшығамы был, насарғамы... Тәүге көндә уның менән булған көс һынашыуҙан һуң, башҡаларға ҡарата һаман да дорфа ҡыланған кесе командир, ни өсөндөр, Тәфтизәнгә айырыусараҡ, дөрөҫөрәге, һағыраҡ өндәшергә тырыша һымаҡ ине... Бәлки, шулай тойола ғыналыр. Кесе командир төп бурыстарынан тыш, һәр һалдатҡа өҫтәмә эштәр йөкмәтте. Васильев көн дә отбой алдынан тырышатырыша үтекләп, сержанттың гимнастеркаһына аҡ яға тегә. Насарыраҡ килеп сыҡһа, тегеһе һүгенеп, "молодой"ҙың "икмәк шүрлегенә" бер-икене менеп төшөргә лә иренмәй. Әле генә тегелгән аҡ яғаны һүтеп ташлай ҙа, яңынан тегергә ҡуша... Ельцов фамилиялы һалдат көн дә уның итектәрен көҙгөләй итеп ялтыратып ҡуя. Тағы кемдер һәр кис һайын "старик"тың сылғауҙарын һәр кис һайын ап-аҡ итеп йыуып, үтек менән киптереп бирә. Көндөҙ фәҡәт дәрестәр расписаниеһы буйынса йәшәгән батальон, киске аштан һуң, часть буйынса дежурный күрмәгән саҡта, тап ошоноң кеүек "бабай"ҙарҙың шәхси йомоштарын үтәүгә күсә.

Бер мәл, шулай ҙа, көнкүреш бүлмәһенә килеп ингән дежур офицер Ельцовтың кескенә итекте таҙартып торғанын күреп ҡалды:

- Отставить! Кемдең итеген таҙартып тораһың?

- Үҙемдеке... - тине ни әйтергә лә белмәгән меҫкен һалдат. Ельцовтың был итектәр йәнәшәһендәге ҡырҡ дүртенсе размерлы аяҡтарына ҡарап, капитан бар тештәрен күрһәтеп уҫал йылмайҙы:

- "Детский мир"ҙан алдыңмы был итектәрҙе, - тип көлдө. Итектәр, һис һүҙһеҙ, сержант Колупаевтыҡы икәненә төшөнгән капитан шундуҡ уның эйәһен саҡыртып алды һәм асыу менән итектәрен уның алдына быраҡтырҙы. Йәш һалдаттан уставтан тыш эш эшләтән өсөн сержантты "смирно" баҫтырып ҡуйып, уға ярты сәғәт дауамында лекция уҡыны... Дежурный үҙенең бүлмәһенә инеп юғалыу менән сержанттан Ельцовҡа тос ҡына эләкте. Иғтибарһыҙлыҡ өсөн... Кескенә "шпинголет"ҡа бер һүҙ әйтергә лә баҙнат итмәй ҡурҡып торған мәмәй Ельцовҡа ярҙамға килергә Тәфтизәндең күңеле тартманы. "Бешмәгән", тип кенә һөйләнде ул үҙ алдына. Әйҙә, таҙарт сержанттың һаҫыҡ итеген, ҡуян йөрәк...

Ғәжәпкә, башбаштаҡ Тәфтизәнгә тәүге көндә лә, иртәгәһенә лә өҫтәмә эш теймәне... Ул устав ҡағиҙәләрен уҡыны, казарма мөйөшөндә ярақлаштырылған спорт снарядтарында һәр төрлө күнегеүҙәр менән шөғөлләнде. Кистәрен ата-әсәһенә, һөйгәненә хаттар яҙҙы. Уның ошо карантин ваҡытында "ҡан менән яулап алған" иреклe хәленә иптәштәре бер аҙ көнләшеп тә ҡарай кеүек ине. Устав буйынса ҡушылған эштәрҙән, әлбиттә, Тәфтизән баш тартманы. Рота буйынса дневальный, йә иһә башҡа берәй вазифаларҙы ул бик тырышып, еренә еткереп үтәне. Дневальный булғас, башҡалар менән бер рәттән, уға бәҙрәф йыуыу кеүек бысраҡ эштәрҙе лә башҡарырға тура килде. Үҙенә тейгән вазифаны һәр саҡ тейешенсә ҡабул итте ҡара эшкә өйрәнгән ауыл малайы...

Доктор яҙып алған теге "синяк"тар буйынса уны батальондың замполиты бер нисә мәртәбә саҡыртып, һорау алғыланы. Батальонда кем "дедовщина" менән шөғөлләнгәнен, кем йәш һалдатты ҡыйырһытҡанын белеү ине уның маҡсаты. "Берәү ҙә белмәйәсәк кем әйткәнен", тип хәйләләп тә һорап ҡараны ул. Ләкин һалдат үҙенекендә ҡаты торҙо, ҡыйырһытыусыларын һатманы. "Гражданканан", тип кенә яуапланы һәр саҡ.

Бер көн яҡташы Илһам отбой алдынан хат яҙып ултырған Тәфтизән янына килде.

- Присяганан һуң беҙҙе полктарға таратасаҡтар икән, - тине ул бер аҙ бойоҡ төҫ алып. - Һинең менән бер часҡа эләгергә ине...

- Әллә инде, уныһын һинең менән минән һорамаҫтар шул, - Тәфтизән яҙып бөткән хатын маркаһыҙ конвертҡа һалып, төкөрөклəп йәбештерҙе. - Комбатҡа барып һорап ҡарарғалыр бәлки?...

- Беләһеңме, Тәфтизән, бында һалдаттар араһында һинең турала ниндәй хәбәр йөрөгәнен? - ул шыбырлауға күсте. - Ике хәбәр: береһе - яҡшы, икенсеһе - насар.

- Юҡ, ишеткәнем юҡ, - тине Тәфтизән бер аҙ һағайып. - Йә, яҡшыһынан башла, - ул тыңларға әҙерләнде. Берәйһе тыңлап тормаймы икән, тигәндәй, Илһам тирә-яғана ҡаранып алды ла:

- Теге тәүге көн мунса янында булған хәл тураһында бөтә дивизия белә, тиҙәр... Хатта офицерҙарға ла барып еткән был мәғлүмәт. Комбат бар сержанттарҙы йыйып, уларға өгөт-нәсихәт уҡыған, имеш... Әлбиттә, был хәлдән һуң дивизияла "бабайлыҡ" бөтмәҫ бөтөүгә, әммә һинең үҙ үҙеңә ирек яулап алыуыңа бар һалдаттар таң ҡалған. Һиҙәһеңдер, Колупаевтың һиңә тик уставса ғына мөғәмәләлә булғанын?

- Һиҙәм, - тине Тәфтизән. - Тик был "уставса" ҡыланыуҙар, ғәҙәттә, дауыл алдынан була торған тынлыҡты хәтерләтә...

- Икенсе, йәғни, насар хәбәр тап ана шул турала, - тине Илһам тағы ла әкеренерәк шыбырҙап. - Полкка барғас та ундағы полковой "старик"тар ярҙамында һине "аҡылға" ултыртмаҡсылар, имеш...

- Ҡарап ҡарарбыҙ, - тине Тәфтизән. - Ә һин ни өсөн уларҙан ҡурҡаһың?

- Был карантиндағы тормош әле беҙҙең кеүек "молодой"ҙар өсөн ожмах ҡына икән, тиҙәр... Бында бер отделениегә бер сержант ҡына булһа, полктағыларҙың дүрттән өс өлөшө беҙҙән алдараҡ килеүселәр икән.

- Ҡарап ҡарарбыҙ...

* * *

Карантинға килгәндәренә бер ай тулғас, барыһын да строй плацына теҙҙеләр. Өр-яңы парад формаларына кейенгән, күкрәктәренә автоматтарын аҫҡан йәш һалдаттар, берәм-һәрәм саф алдына сығып, хәрби ант яҙылған ҡағыҙҙы уҡығандан һуң, уға ҡул ҡуйҙылар. Ошоноң менән уларҙын карантин тормошо тамамланды. Шул арала бер аҙ устав ҡағиҙәләре менән танышҡан, стройҙа йөрөргә өйрәнгән йәш һалдаттарҙы, барлыҡ кейемһалымдарын арҡаларына йөкмәтеп, дивизиялағы бер нисә полкка тараттылар. Ә полкка килгән һалдаттарҙы үҙ нәүбәтендә дивизиондарға бүлеп бирҙеләр.

Тәфтизән менән Илһам икеһе бер часҡа - өсөнсө һанлы ракета полкына тәғәйенләнде, ләкин икеһе ике дивизионға эләкте. Шулай ҙа уларҙың дивизиондары бер казармала йәшәй ине.

Тәүҙә уларҙы старшина ҡаршы алды. Погондарында бер рәттән урынлашҡан ике бәләкәй йондоҙло, түбә сәсе бер аҙ һирәгәйә башлаған ҡырҡ йәштәр самаһындағы прапорщик бик ентекләп йәштәрҙең обмундированиеһын тикшерҙе, парад кейемдәрен йыйып алып, "каптерка"һына япты.

- Не дай бог, - тине ул йәштәрҙең өҫтөндәге өр-яңы "полевой" кейемдәренә ҡарап, - кем дә кем яңы кейемен өлкән һалдаттарға бирә - һуңынан үҙенә үпкәләһен... Итектәрегеҙҙе лә һаҡлағыҙ. Улар ярты йылһыҙ алыштырылмаясаҡ.

Башҡаса оло һалдаттарҙың күҙен ҡыҙҙырмаһын өсөн Тәфтизән ҡулындағы сәғәтен сисеп, гимнастерка кеҫәһенә һалып алды. Шулай тынысыраҡ булыр...

Тәү ҡарауҙа, полкта ла карантиндағы һымаҡ. Бер ни һиҙмәгән бала турғай тирәһендә ураңғылаған ата бесәй кеүек, унда-бында йөрөгән оло һалдаттарҙы иҫәпкә алмағанда... Өҫкө иҙеүҙәре ысҡындырылған, ҡояшҡа ағарған гимнастеркаларына, билдәрендәге буп-бушаҡ итеп эленгән һалдат ҡайыштарының кендек түбәненә төшөп торған пряжкаларына ҡарап, уларҙың инде кәмендә бер йыл хеҙмәт иткәнлеген аңларға була. Ҡайһы берәүҙәре ҡаршыларына осраған офицерҙарға честь биреп сәләмләгән булып, ысынында иһә, уң ҡулдары менән пилоткаларын төҙәтеп кейәләр ҙә, уның янынан уставса честь биреп үткән офицерҙы төп башына ултыртҡанына ҡәнәғәтләнеп, артабан китә... Ҡәнәғәтләнә, сөнки ул офицерға түгел, ә, киреһенсә, офицер уға честь биреп уҙҙы бит!.. Ғөмүмән, көндөҙгө тормош, быға саҡлы Тәфтизән күҙ алдына килтергәнсә үк, карантиндағы кеүек, ҡәҙимге һалдат тормошо инде. Һалдат ашханаһында йәштәргә эләккән ары-бире шыйыҡ-мыйыҡ итһеҙ һурпаны иҫәпкә алмағанда... Сөнки карантинда, сержанттан башҡа оло һалдаттар булмағанға күрә, ниндәй генә булыуына ҡарамаҫтан аш барыһына ла тигеҙ бүленә ине. Ә бында бүленгән аштың ҡуйылығы хеҙмәт срогына тура пропорциональ рәүешле...

***✓ Тәфтизән күп уйлап торманы, кинәт теге һалдаттың ике аяғынан эләктереп алды ла, мастика менән ялтыратылған паркет иҙәнгә һөйрәп төшөрҙө. "Ҡарт" һалдат, әлбиттә, "молодой"ҙан быны көтмәгәйне.***

Казармала исемлек буйынса тәүге киске тикшереүҙән һуң, һалдаттарға тыныс йоҡо теләп, взвод командиры һәм старшина өйҙәренә ҡайтып китте. Улар сығып китеү менән иң тәүҙә кавказ милләтле бер нисә "ҡарт" һалдат йәштәр араһында үҙҙәренең яҡташтарын табып алып, улар менән ҡосаҡлашып күрешеп, үҙ телдәрендә һөйләшеп таныша ла башланы. Янына килеүсе яҡташтары булмағас, оло һалдаттар араһында башҡорттар юҡ ахрыһы, тип уйланы Тәфтизән. Хәйер, киске тикшереү ваҡытында исемлектән үҙенән һәм Йосопов Илһамдан тыш, Вәлиуллин, Сәғитов, Шәрифуллин тигән мосолман (башҡорт йә иһә татар) фамилиялары яңғырағайны ла баһа... Был оло һалдаттарҙы яңы килгән яҡташтары ҡыҙыҡһындырмаймы икән... Ғөмүмән, "Абдулов, һин ҡайһы яҡтан?", йә иһә "Башҡортостандан кешеләр бармы?" тигән ҡыҙыҡһыныулы һорауҙар булманы. Ярай, һуңынаныраҡ үҙе танышып алыр әле улар менән...

"Отбой!" командаһына башҡалар менән бер рәттән Тәфтизән дә йәһәт кенә сисенеп, өҫкө ярустағы үҙ карауатына сумды. Йоҡоға китеп тә өлгөрмәгән һалдат аҫҡы карауатта ятҡан "старик"тың матрас аша арҡаһына ҡаты ғына итеп тибеүенә тертләне һәм йәһәт кенә һикереп иҙәнгә төштө.

- Нимә, тибенәһең?! - тип екерҙе Тәфтизән кейемен дә һалмаған көйө карауатында һуҙылып төшөп, мыҫҡыллы йылмайып ятҡан һалдатҡа. Шунда уҡ уның аяғындағы өр-яңы итектәргә иғтибар итте. Тәфтизәндеке. "Был итектәр хәҙер минеке, молодой, белеп ҡуй", тип әйтергә теләгән һымаҡ юрый уятҡан... Ә уныҡылар урынында - тапалып бөткән иҫке итектәр...

- Сис минең итектәрҙе! - тине Тәфтизән асыу менән. Ә тегеһе бер ни булмағандай, ике ҡулын салбар кеҫәләренә тыҡҡан килеш, ишетелер-ишетелмәҫ итеп танау эсенән ниҙер көйләп ята бирҙе. Тәфтизән күп уйлап торманы, кинәт теге һалдаттың ике аяғынан эләктереп алды ла, мастика менән ялтыратылған паркет иҙәнгә һөйрәп төшөрҙө. "Ҡарт" һалдат, әлбиттә, "молодой"ҙан быны көтмәгәйне. Ысынлап та көтмәгәйне: ғүмерҙә булмаған хәл бит был! Нисек ул өлкән һалдатҡа ҡул күтәрергә баҙнат итте? Шау-шыуға ни өсөндөр һаман да сисенмәгән тағы бер нисә "старик" килеп етте. Итектәрен һалдырып алырға маташып, өлкән һалдатты иҙән буйлатып һөйрәкләгән "салага"ны күреп, тәүҙәрәк бер аҙ аптырап төшкән оло һалдаттарҙың береһе трусикта ғына йөрөгән Тәфтизәндең артына тибеп ебәрҙе:

- Ты че, салага? Йәшәүҙән туйҙыңмы әллә?

- Нишләп ул минең итектәрҙе кейеп алған, пусть кире бирһен! - тине йәш һалдат ярһыуынан йыш-йыш тын алып. Һалдаттың аяғынан ҡулдарын ысҡындырғайны, тегеһе Тәфтизәнгә һуҡмаҡсы итте, ләкин уның йоҙроғо ваҡытында ялтанып өлгөргән йәш һалдатты ситләтеп, карауат башына барып бәрелде... Ул арала аҫҡы ярустарға урындарын йәйеп ятырға йыйынған олораҡ һалдаттар тамаша булған урынға берәм-һәрәм яҡынлаша башланы. Йәштәр барыһы ла йоҡлағанға һалышып, одеялдарын бөркәнеп ятыуҙы хуп күрҙе...

- Киттек, бытовкаға, - тине аралағы дәү кәүҙәле ефрейтор Тәфтизәнде һәм Ярошенконы (итек бурының фамилияһы шулай ине) әйҙәп. Шау-шыуға килеп еткән рота буйынса дежурный - сибек кенә йәш кесе сержант быларҙы туҡтатырға маташты:

- Егеттәр, бәлки, кәрәкмәйҙер, ә?..

Ләкин әле генә "учебка" тамамлап килгән, ни бары ярты йыл хеҙмәт итеп өлгөргән Сидоровты ишетеүсе кеше булманы тиерлек. Тик теге ефрейтор ғына:

- Кит бынан, сопляк, аяҡ араһында буталма! - тип тегене ҡыуып ебәрҙе.

-Часть буйынса дежурный килеп инеүе мөмкин!..

Сидоровтың сибек тауышы башҡаларҙың геүләүенә күмелеп ҡалды. Тағы ла өс-дүрт оло һалдат Тәфтизәндәр артынан бытовкаға йүнәлде...

...Бытовка бүлмәһендә лә бер ай элек карантиндағы хәл ҡабатланды. Тағы ла туҡмалыу... Тик был юлы "старик"тар йоҙроҡтарына таҫтамал урап дөмбәҫләне уны. Дүрт-бишләгән кешегә һис ҡаршы тора алманы Тәфтизән. Теге украин ефрейтор үҙе генә ни тора! Һалдат көс-хәл менән карауатына барып ауҙы. Үлһә-үлер, барыбер баш эймәйәсәк ошо хайуандарға... Шулай урыҡ-һурыҡ уйҙар башына килә-китә, һаташа-һаташа йоҡлап китте.

...- Ҡалай көслө һин, Тәпез, - ти Әмилә һоҡланып, уның мускулдары ташып торған беләген тотҡолап ҡарап. Һине бер ҡасан да, бер кем дә еңә алмаҫ кеүек...

- Еңеү, күбеһенсә, ихтыяр көсөнән килә. Беләк көсө - икенсе нәүбәттә, Әмиләкәйем, - ти Тәфтизән ҡыҙҙың алтын сәстәренән һыйпап.

- Ә һабантуйҙа ихтыяр көсөң менән генә еңдеңме ни? - тип шаярта ҡыҙ.

- Көслө, тиһең, ә бына һине һаман да еңә алмайым, - тип, егет ҡыҙҙы кинәт кенә ҡосаҡларға итте, әммә йылға балығы кеүек йылғыр ҡыҙ, ҡулынан ысҡынып, сылтырҙатып көлә-көлә йүгереп китте. Уның артынан ҡыуа төшкән егет, ни өсөндөр, йүгерә алмай, аяҡтарын таштар, үләндәр сәнскеләй... Ә итектәр... Ҡайҙа булған уның итектәре?.. Артында кемдеңдер булыуын һиҙеп, боролоп ҡарай: Ярошенко?! Уның өр-яңы итектәрен кейеп алған... Асыуынан ярһыған егет уның аяҡтарына йәбешә. Ә ул таш һын кеүек ҡатҡан да, мыҫҡыллы йылмайып тора бирә...

"Подъем!" тигән тауышҡа кинәт уянып китте шыбыр тиргә батҡан Тәфтизән. Ғәҙәте буйынса, икенсе ярустан етеҙ генә һикереп төштө лә тиҙ генә салбарын кейеп алды. Ә итектәр?.. Уның яңы итектәре әлениңәлер һаман да уянмаған "яңы хужа"һының янында ыҡсым ғына тора. Башҡаса итеген талап итмәҫ был "молодой", тип уйлағандыр. Хужа булмай торһон әле... Һәрмәп ҡараһын этемдең ҡойроғон Ярошенко... Тәфтизән үҙенең итектәрен сылғаулап кейеп алды ла, уның урынына тегенең иҫкеләрен ҡуйҙы һәм күнекмәләр эшләргә йүгереп сығып китте.

Көн взвод расписаниеһына ярашлы, һәр төрлө дәрестәр, күнекмәләр менән үтте. Төшкә тиклем устав, сафҡа теҙелергә өйрәнеү, төштән һуң физик әҙерлек. Тәфтизән менән бер взводта булған Ярошенко буйға ла уның менән типә-тиң. Шуғамылыр, уларҙың сафтағы урындары һәр саҡ йәнәш тап килә... Ярошенко асыулы күҙҙәре менән Тәфтизәнгә ҡарап-ҡарап ала, ләкин занятие үткәргән офицер алдында ниҙер әйтергә баҙнат итмәй. Шулай ҙа бер "перекур" ваҡытында яйын табып, теш араһынан ғына йылан кеүек ыҫылданы:

- Аҫылынырға еп һабынлай тор, салага, был донъяға тыуғаныңа бөгөн кис бик үкенергә тура киләсәк...

Бының кеүек ҡырағай һүҙ теҙмәләренән торған янауҙы һәр төрлө криминал детектив китаптарында осратҡаны бар Тәфтизәндең. Ә бер заман уларҙы армияла ишетермен, тип башына ла килтермәгәйне.

**(Дауамы бар).**

*БЕР ХӘРЕФ ХИКМӘТЕ*

# ҠЫУАНБАЙ КӘМИТТӘРЕ



**"Ҡ" хәрефенең мөғөҙһөҙ ҡустыһы "К" хәрефе бит инде. Һәр хәлдә, туҡал "К" һөҙгәк "Ҡ" ағаһына ихтирам менән ҡарай, бер аҙ шөрләңкерәй ҙә. Шөрләмәй ни, анаусама мөгөҙөнә бер барып эләкһә. "Ҡ"-ға ҡапһаң, ҡабырғаңды ҡалдырмаҫ, ҡотоңдо ҡасырыр, ҡабығыңды ҡойор, туҡал "К" күрмәгәнен күрер, кисермәгәнен кисерер...**
**Шуға күрә уларҙы айырмайынса ғына, шағир Буранбай ағай Исҡужинға оҡшатыңҡырап, шулай уҡ Жәлил Кейекбаев ағайҙың башҡорттоң "Ҡ"һы тураһындағы әйткән һүҙҙәрен иҫкә төшөрөп, мин дә хикәйә әтмәләп ҡарарға булдым әле.**

Ҡояш Ҡоръятмаҫҡа ҡапланып, көн кисләтеп килгәндә Ҡыуанбайҙың "Колос" комбайны Ҡоръятмаҫ ҡаршыһында "ҡарлығып" ҡыйраны. Ҡыуанбай ҡаты көрһөнөп, ҡырғысланып ҡаҡашып ҡатҡан костюмының кеҫәһенән кисетен ҡарманы. Көйрәтте. Киске ҡырҙарға ҡарап, ҡырлы кепкаһын ҡырынайтыңҡырап кейеп, күрәсәген күҙалларға кереште.

Күрәләтә килеп ҡағылды ҡалған комбайндар ҡалдырып киткән күбәләй ҡалын күтәремгә. Комбайнының "ҡуғырлайы" ҡалын ҡалынлыҡҡа - ҡарлыҡты.

Ҡайһылайтып ҡарарға? Комбайнды ҡарауылсыһыҙ ҡалдырып ҡайтып китһәң - ҡасҡын күрерҙәр. Ҡайтҡанда ла, ҡалайтып ҡайтыр? Кис, ҡараңғыға ла күп ҡалманы. Ҡапылғара ҡайтырға ла китергәме? Ҡараңғыла ҡап-ҡара кешене (ҡулдары, кейеме, кирзаһы, ҡиәфәте, килбәте) Ҡоръятмаҫтың ҡарасҡыһы күреп, ҡобаралары ҡубарылыр ҡаршы килгән кешенең. Комбайнсы күңеле китеңкерәп, киске кейек, ҡош-ҡорт ҡыштырлауҙарына, ҡысҡырыу-ҡарҡылдауҙарына ҡолаҡтарын ҡарпайтты. Күрмәгәнен күрһәтте Ҡоръятмаҫ, ҡыҙыҡтарын да, ҡыҙғаныстарын да...

* * *

Ҡасандыр, ҡышҡы ҡырпаҡ ҡарҙа ҡушкөбәген ҡултығына ҡыҫтырып, ҡуян, ҡор ҡарарға Ҡоръятмаҫҡа килгәйне. Ҡырҙа киртләс-киртләс Ҡырҡтытау ҡаялары күренә. Ҡалын ҡарҙан ҡалпаҡтарын күрһәтеп, ҡырлы ҡурайҙар ҡатып ҡалған. Ҡола ҡалған ҡайындарҙа ҡайсаҡ ҡышларға ҡалған ҡоштар күренгеләй. Ҡыуанбай ҡуян, ҡор күтәреп, ҡатынына ҡыуанып ҡайтҡыһы килгәйне. Ҡайтты ҡайтмай ҙа, ҡыуанды ҡыуанмай ҙа.

Күк көмбәҙе ҡапыл ҡараңғыланды ла, Ҡоръятмаҫты ҡапланы. Ҡараһа, ҡуйы ҡыуаҡлыҡтан ҡаршыһына ҡарасҡы кеүек килбәтһеҙ, ҡорһағын кәпәйткән ҡабан килеп ҡалҡты. Ҡапылғара ҡайҙалыр ҡасып киткеһеҙ, ҡулдары ҡалтырай, кәпәс кейгән "котелокка" - "кәпис!" Ҡыуанбай кәүҙәһен ҡапшаны, ҡыймылданы, ҡушкөбәген көскә күтәрҙе. Ҡабанды ҡурҡытырға кәһәтләнгәйне. Ҡабан ҡасманы, ҡымшанманы ла. Ҡыуанбайға ҡараны ла ҡатты. Ҡыуанбайҙың күкрәгендәге ҡыйыулығы ҡайҙалыр ҡасып, күҙҙәре ҡашынан күпкә-ә-ә-ә күтәрелеп китеп, ҡобараһы ҡубып, ҡарға ҡоланы. Күпме ҡатып күшеккәндер ҡарҙа, кәүҙәһен кемдер ҡыймылдатты. Күҙҙәрен кәпесләтеп күтәрелеп ҡараһа, ҡаршыһында көҙҙән кәртәнән ҡасып киткән ҡобаһы, кәһәрең. Ҡоба көйшәй-көйшәй Ҡыуанбайға ҡарап ҡатып ҡалған. Ҡушаматы - Ҡорттоҡай. Ҡолағын кәзә кимереп, ҡойроғо ҡапҡаға ҡыҫылып, ҡортлап киткәйне. Ҡушаматы ҡобаға килеште, килешеп кенә ҡалманы, ҡорт кеүек ҡаҙалды.

-Кит, ҡарасҡы, ҡоромағыр, ҡаҡашҡан кафыр, ҡойроғоңдо ҡайырайым. Кеше ҡурҡытып, ҡотһоҙ ҡалдырҙың. Ҡабан ҡошап. Ҡайт кәртә-ҡураңа, Ҡушкүлеңә...

Ҡыуанбайҙың ҡатыңҡырып киткән ҡулы ҡапыл ҡобаһының ҡойроғон ҡомаҡ ҡапҡаны кеүек ҡымтыны. Ҡушкөбәгенең көбәге ҡорсаңғыһының ҡабырғаһына ҡатып килеп ҡунды. Көтөлмәгән ҡағылыуҙан ҡасҡалаҡтың күҙҙәренә ҡаранан-ҡара күренмәй, Ҡоръятмаҫ ҡултығындағы Ҡушкүлгә ҡарай ҡуҙғалыуынан ҡар күпереп, ҡойон кеүек күтәрелеп кенә ҡалды.

Ҡобаһы ҡурағa ҡойон кеүек ҡайтып кергәс, Ҡыуанбайҙың ҡарсығы ҡапыл ҡото ҡасып, ҡысҡыра-ҡысҡыра, күршеләрен килтереп, ҡайтып кергән ҡорсаңғыһын күрһәтеп ҡыуанды.

-Күршеләрәм, ҡурама күңелле көндәр килде. Ҡайтты көҙ ҡасып киткән ҡобабыҙ, "Ҡолһуалла"ларым ҡабул ҡылынды, ҡабат китмәҫ, ҡабан ҡыуаларға киткән Ҡыуанбайым да ҡайтыр, көндөҙ киткәйне... - Ҡыуанбайҙың ҡарсығы Кафия ҡыуанысынан күршеһе "Кәпирәт Ҡобораны" килтереп, көньяҡ коньягын көрөшкәгә ҡойоп кәктереп, кәтлит ҡаптырҙы.

-Ҡотло ҡулһың, Кафия күршекәйем. Ҡобаң да ҡайтты, Ҡыуанбайың да күп көттөрмәҫ... - "Кәпирәт Ҡобора" кеткелдәй-кеткелдәй көрөшкәнән көньяҡ коньягын кәкте лә кәкте...

Ҡыуанбай ҡабырғалары, күкрәге, күҙҙәре күгәреп, көскә ҡайтып карауатҡа кәкерәйҙе. Ҡушкүл кешеләренә күп кенә көндәр күренмәне. Ҡобаһы ла кәртәнән ҡойроғон да күрһәтмәне...

* * *

Күрмәгәндәрен күрҙе ҡабан ҡарарға Ҡоръятмаҫҡа килгән Ҡыуанбай. Ҡыҫҡаһы, ҡасҡалаҡ ҡобаһын ҡабан күреп, ҡабат ҡабан ҡарарға килмәне. Ҡурҡҡанға ҡуш күренә. Ҡарлыҡҡан комбайнына ҡарап, көрһөндө, ҡарһаланды: ҡалайтып ҡарарға комбайнды?.. Ҡарлыҡҡан күтәремде кире "ҡоҫтороп" ҡарағанда? Кәһәтләнеүенән ҡыуанған Ҡыуанбай ҡурҡыуын ҡалдырып, күҙенә күренгән ҡыуалды ҡулына ҡармап, комбайнына ҡаҙалды. Ҡалайтһа-ҡалайтһын, комбайнының ҡарышҡан ҡайыштарын ҡайырып, ҡуласаһын ҡырынайтып, ҡабат кире килтереп, көскә "ҡоҫторҙо" күтәремде. Ҡарлыҡҡанда ҡалай килешле күренеп ҡалғайны күтәрем, ҡоҫторғанда Ҡыуанбай Ҡоръятмаҫта ҡурҡҡан ҡабан ҡиәфәтендә күренде.

Ҡыуанып, көткән-килер көндәрен ҡаршылар Ҡыуанбай ҡанатланап китеп, көлә-көлә комбайнында Ҡушкүлгә ҡарай ҡуҙғалды. Ҡорос комбайн ҡанатлы космос карабы кеүек. Ҡыуанбайҙың ҡыуанысы күңеленә килгән көйгә ҡушылды. Кәлимәһе лә ҡулай:

Кәләшемдәй ҡәҙерлеһең
Комбайным- "Колосбикәм"
Ҡоҫторғанға күтәремде
Ҡыуанһын кәләшбикәм.

**Мәүлит СӘЛИМЙӘНОВ.**

✓ *Джон Далли Евросоюз илдәре өсөн дөйөм бер закон ҡабул итергә һәм йәмәғәт урындарында, транспортта һәм эш урындарында тәмәке тартыуҙы тыйырға тәҡдим итә.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ТЕЛЕФОНДЫ ҺҮНДЕРЕҮ... тынысландыра

■ Немец газетаһы Die Welt хәбәр итеүенсә, Һаулыҡ һаҡлау мәсьәләләре буйынса комиссар Джон Далли йәмәғәт урындарында тәмәке тартыуҙы тыйыусы закон ҡабул итергә кәрәклеге тураһында белдергән. Еврокомиссар әйтеүенсә, Евросоюздың күп илдәрендә урындағы закондар йәмәғәт урындарында тәмәке тартыуҙы тыя һәм тәмәкеселәр өсөн унда махсус бүлмәләр ҡаралған. Халыҡ йолаһы буйынса, бөтөнләй тәмәке тартыу тыйылған илдәрҙә яҙылмаған был ҡанунға хатта ресторан тотоусылар ҙа буйһона. Евросоюз илдәре буйынса мәғлүмәттәргә ярашлы, тәмәке йыл һайын 650 мең кешенең ғүмерен өҙә. Шуға ла Джон Далли Евросоюз илдәре өсөн дөйөм бер закон ҡабул итергә һәм йәмәғәт урындарында, транспортта һәм эш урындарында тәмәке тартыуҙы тыйырға тәҡдим итә.

■ Табиптар эш көнөнән һуң өйгә ҡайтҡас та телефонды һәм компьютерҙы һүндереп ҡуйырға кәңәш итә, юғиһә, йоҡоһоҙлоҡ сире менән яфаланыуығыҙ бар. Психолог һәм төштәрҙе тикшереүсе профессор Юрген Зюллей телефон аша эш буйынса шылтыратыуҙар кешене көсөргәнештә тотоуы һәм яҡшылап ял итергә ҡамасаулауы тураһында иҫкәртә. Ә телефонды һүндереп ҡуйыу был күңелһеҙлектән ҡотҡарып ҡына ҡалмаясаҡ, тиҙерәк йоҡлап китергә лә ярҙам итәсәк.

■ Артыҡ ауырлыҡтан ҡотолорға ярҙам итеүсе тик үләндәрҙән генә торған биологик әүҙем өҫтәмәләр (БАД) ысынбарлыҡта яһалма фармацевтик матдәләрҙән тора. Етмәһә, уларҙың ҡайһы берҙәре закон тарафынан фармацевтикала ҡулланыуҙан тыйылған. Гонконг ғалимдары биологик әүҙем өҫтәмәләр ҡабул итеү һөҙөмтәһендә ағыуланып, принцесса Маргерет исемендәге дауаханаға эләккән пациенттарҙы һәм улар ҡулланған 81 продуктты тикшереп ҡараған. 61 осраҡта бер йәки ике, икәүһендә - алты синтетик препарат табылған. Ҡайһы бер мәғлүмәттәр буйынса, АҠШ-та бындай өҫтәмәләргә йылына 34 млрд. доллар тотонола. Гарвард медицина мәктәбе доценты Питер Коэн әйтеүенсә, был биологик өҫтәмәләрҙең ҡайһы берҙәре бөтөнләй тикшереү үтмәгән.

■ Америка ғалимдары химия терапияһын алыштырыусы сара уйлап тапҡан. Яман шеш сирен дауалауы бик ауыр, сөнки был сирҙең һәр осрағы генетик һәм башҡа факторҙарҙың ҡабатланмаҫ ҡатнашмаһы һөҙөмтәһе булып тора. Шуға ла химиотерапия ваҡытында кире эҙемтәләр, мәҫәлән, сәс ҡойолоуы күҙәтелә. Калифорния технологик институты ғалимдары яман шешкә ҡаршы көрәшеүсе препараттарҙың мутация барған күҙәнәктәргә генә тәьҫир итеүенә өлгәшеү ысулын уйлап сығарыу өсөн күптән тикшеренеүҙәр алып барған һәм был мәсьәләне ыңғай хәл итеүҙә тәүге аҙымды яһаған да инде. Улар РНК-ның кодланмаған махсус молекулаларын яһауға өлгәшкән, йәғни был молекулалар онкологик мутация осрағында ғына препараттың терапевтик көсөн әүҙемләштерә. Барлыҡҡа килгән реакцияны сирле күҙәнәк вирус тип ҡабул итә һәм үҙен-үҙе юҡҡа сығара. Тәжрибә барышында ошо юл менән баш мейеһе, простата биҙе һәм кешенең һөйәк туҡымаһындағы яман шеш күҙәнәктәрен юҡҡа сығарыу мөмкин булған. Хәҙер был ысулды киңерәк масштабта ҡулланыу мөмкинлеге тикшерелә.

*ЮЛДАР САЙТЫНДА*

# ИНТЕРНЕТ СЕЛТӘРҘӘРЕНДӘ...




## Башҡортостан һәм башҡорттар

### Үҙебеҙ хаҡында һүҙебеҙ

Башҡорт интернет-сайттарын уларҙа урынлаштырылған мәғлүмәттең күләме һәм сифаты буйынса байҡағанда, ҡайһы бер үҙенсәлектәрҙе лә иҫәпкә алмай булмай. Беренсенән, улар, рус йә башҡа телдә булһынмы, иң беренсе нәүбәттә башҡорттар һәм Башҡортостан тураһында мәғлүмәт бирергә тейеш. Икенсенән, унда кергән кешеләр башҡортса ла үҙ фекерен әйтә алырға тейеш, тимәк, администраторҙың башҡортса белеүе шарт. Ошонан сығып ҡарағанда, мәҫәлән, тик Башҡортостанда ғына теркәлгән булғаны өсөн сайт башҡорт сайты була алмай. Шулай уҡ, әгәр администратор башҡорста белмәһә, ул сайтында башҡортса материалдар ҡуя алмаясаҡ, сөнки уларҙы бит мөхәррирләргә тейеш буласаҡ.

Башҡорт халҡының интернет киңлегендәге вәкиллелеген киңәйтеү өсөн мөмкинлектәр етерлек. Башҡорттар, Башҡортостан тураһында кәрәкле һәм дөрөҫ мәғлүмәттәрҙе кәрәк саҡта алыр өсөн барыһы ла иркен керерлек сайттарҙың күплеге мөһим. Республикабыҙҙа йылдар дауамындағы эшмәкәрлектәре һөҙөмтәһендә иҫәпһеҙ-һанһыҙ материал туплаған ойошмалар етерлек (ғилми-тикшеренеү институттары, вуз кафедралары, музейҙар, китапханалар, архивтар һ. б.). Бында ул материалдарҙы электрон формаға күсереп, селтәргә урынлаштырыу буйынса системалы эш кәрәклеге тураһында һүҙ бара. Уныһы ла күпселектә тарихи сығанаҡтарға ҡағыла, сөнки бик күп эште тап шуларҙы цифрлы технологияға күсереү тәшкил итәсәк (тәржемә, редакторлау, һүрәт, фото, карталарҙы эшкәртеү һ. б.).

Интернетта сайттар һаны көн һайын арта бара. Әйтергә кәрәк, улар барыһы ла бер-береһенә оҡшаш, күрҙем-эшләнем технологияһы буйынса, бер-береһенән тейешле хеҙмәттәрҙе, шулай уҡ етешһеҙлектәрҙе лә, күсереп эшләнә. Шуға ла был байҡауҙа беҙ күберәк етешһеҙлектәргә иғтибар итергә тырышырбыҙ. Тик башҡортса ул сайттың барлығы үҙе уҡ яҡшы һәм етешһеҙлектәрҙе һәр саҡ төҙәтеп була икәнен күҙ уңында ғына тоторға кәрәк.

### Ҡайһы бер башҡорт сайттарына ҡыҫҡаса байҡау

**(zarubejom.yeshlek.ru) Сит илдәрҙә Башҡортостан студенттарының сайты.** Республиканан ситтә уҡыусы Башҡортостан студенттарын виртуаль берләштереү, мәғлүмәт алмашыу һәм аралашыу маҡсатында булдырылған. Үҙенә күрә, интернет эсендә яҡташтар клубы һымаҡ эшләй. Был сайт шаҡтай әүҙем, сөнки Башҡортостандан ситтәге күпселек студенттар өсөн виртуаль аралашыу берҙән-бер сара булып тора, өҫтәүенә, сит илдәрҙә интернет көндәлектә лә ғәҙәти күренеш. Ситкә уҡырға сығып китергә теләгән һәр кеше үҙенән алда быны эшләгән кеше менән бәйләнеп, кәңәшләшеп ала алыуы менән файҙалы.

**(yaktash.yeshlek.ru) Үҙ-ара аралашыу сайты, кешеләр унда үҙҙәре менән таныштыра һәм яңы таныштар эҙләй.**

**(bashtourism.ru) Башҡортостанда туризм һәм ял сайты.** Республикаға килгән туристарҙы маршруттар, билдәле урындар һ. б. менән таныштырыу өсөн реклама сайты һымаҡ яһалған. Был сайттың бик ҙур мөмкинлектәре бар, тик улар, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, файҙаланылмай. Дөрөҫөн әйткәндә, шәхси туристик сайттарҙың күпселегендә Башҡортостан йылғалары һәм тауҙары буйлап маршруттар, лоциялар, карталар һәм һыҙмалар тупланмаһы, фотогалереялар бындағынан байыраҡ. Әгәр беҙ киләсәктә республикабыҙҙы туризм ныҡ үҫешкән ил тип күҙ алдына баҫтырабыҙ икән, был сайтта төрлө маршруттарҙы тикшереүсе форумдар, республика турбизнесы яңылыҡтары, шулай уҡ мажаралар һәм ҡыҙыҡ эҙләп юлға сығыусы сәйәхәтселәрҙе ҡыҙыҡһындырырлыҡ бик күп нәмәләр булырға тейеш.

**(muhabbet.yeshlek.ru) "Танышлыҡ хеҙмәте - йөрәктәрҙе тоташтырыусы проект.** Кешеләрҙең донъяға яртышар ғына булып тыуыуын беләһегеҙме һеҙ? Ташҡа - таш, кешегә кеше, йөрәккә - йөрәк... Танышыу сайты тормош даръяһында үҙенә тоғро дуҫ табырға теләгән кешеләргә, аралашыу, үҙенде ҡыҙыҡһындырған нәмәләр тураһында һөйләшеп алыу өсөн", - тиелә был сайттың аннотацияһында. Ул танышыу өсөн сығарылған бихисап сайттарға оҡшатып эшләнгән. Ҡыҙығыраҡ булһын өсөн, уны башҡорттарҙың боронғо йолаһы - "яусылыҡ хеҙмәте" рәүешендә эшләү ҡамасауламаҫ ине. Администраторҙы ла Башҡоҙа тип атарға, шунда уҡ үҙ яртыһын уңышлы тапҡан бәхетлеләр исемлеген дә алып барырға... Был, ысынлап та, үҙенә ни кәрәклеген белеп эҙләүселәр өсөн бик файҙалы сайт.

**(www.journalist-rb.ru) Башҡортостан Журналистар союзы сайты.** Кемдең кемдең, әммә журналистарҙың үҙҙәренең сайтын күркәм һәм ҡыҙыҡлы итеп эшләр өсөн ижади мөмкинлектәре етерлек булырға тейеш. Бында, күрәһең, мәсьәлә - барлыҡ администраторҙар өсөн дә төп администратор булырға тейешле администратор табыуҙа ғыналыр...

**(www.bishaul.ru) Ҡырмыҫҡалы районының Бишауыл-Уңғар ауылы сайты.** Был сайт - һәр теләгән кешенең бар донъя кимәленә үҙен, тыуған ауылын, туғандарын, илен сығара алыу мөмкинлегенең сағыу миҫалы. Улар бер ниндәй сикһеҙ был донъяла үҙҙәрен тиңдәр араһында тиң итеп күрә ала.

**(http://bashgazet.ru) "Башҡортостан" гәзитенең рәсми сайты.** Бында Башҡортостанда сыҡҡан һәр матбуғат сараһының интернетта үҙ сайты барлығын иҫәпкә алырға кәрәк. Ҡайһы берҙәренең хатта гәзиттәренең электрон версияһы ла эшләй, уға яҙылыу ҙа ойошторолған. Улар менән берҙәм порталда танышырға мөмкин: pressarb.ru. Шуны ла билдәләмәй булмай: матбуғат саралары, уҡыусыны төп йүнәлештән - баҫма варианттан - айырмаҫ өсөн, үҙ сайттарын тик кәрәкле кимәлдә генә алып бара.

**(www.kitap-ufa.ru) Зәйнәб Биишева исемендәге республика "Китап" нәшриәтенең рәсми сайты.** Китап донъяһы яңылыҡтары менән таныштырып бара.

**(www.bashkort.com) "Бына өс йылдан ашыу инде интернетта Мәскәү башҡорттарын берләштергән сайт эшләй.** Шул уҡ ваҡытта был ябай интернет-ресурс түгел. Ул Рәсәй башҡалаһындағы башҡорт диаспораһын билдәләүсе билдә булып китте. Бөгөн сайтта 600-ләп кеше теркәлгән, улар үҙ-ара сайтта аралашыуҙан тыш, тормошта ла ҡатнашып йәшәйҙәр". Сайтсылар үҙҙәренең барлығын аннотацияларында шулай тип аңлата. Был сайтты Мәскәүҙәге башҡорт урамы менән сағыштырырға мөмкин, унда һәр ваҡыт берәй танышыңды осратып, кинәнеп әңгәмәләшеп алырға була. Был баш ҡалалағы әүҙем һәм юғары рухлы, зауыҡлы йәш милләттәштәребеҙҙең үҙ-ара аралашыу, күберәк белеүгә ынтылыуы арҡаһында барлыҡҡа килгән сайт.

**(bashklip.ru) Был бик ҙур дәүмәлдәрҙәге сайт, сөнки унда хатта цифрлы варианттарҙа ла бик ҙур урын биләүсе кинофильмдар, уйындар, онлайн-телевидение кеүек нәмәләр урнлаштырыла.**

**(history.yeshlek.ru) Башҡорт шәжәрәләре сайты.** Үҙеңдең бик атаҡлы, шанлы шәхестәрҙән баш алған тамырҙарыңды белеү, әлбиттә, һәйбәт нәмә. Уны башҡаларға ла сығарыу - тағы ла яҡшыраҡ күренеш. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, үҙ шәжәрәһенә нигеҙ һалған данлыҡлы шәхестәр тарихта әллә ни күп түгел. Әммә үҙеңдең дә, нисәнселер быуында, шуларға ҡағылышлы булыу ихтималлығын байҡарға ла мөмкин бит әле.

**(bashpoisk.ru) Был башҡорт музыкаһы порталы - барлыҡ жанрҙарҙа һәм барлыҡ йылдарҙың йырҙары.** Был сайтта 800-ҙән ашыу башҡарыусы тупланған. Уларҙың композицияларын тыңларға ла, яҙҙырып алырға ла мөмкин. Теркәлгән ҡулланыусылар өсөн сағыштырыу биттәре, хит-парад ағымы бар. Тыңлаусыларға үҙ фекерҙәрен яҙып ҡалдырырға ла мөмкин.Был сайттың төп проблемалары шул уҡ - администратор һәм кәрәкле йырҙарҙы йыйып индереү. Тағы ла "башҡортлаштырып", йыр текстарының хаталарын төҙәтеп тә сыҡҡанда, шәберәк булыр ине. Әйтергә кәрәк, хаталар күпселектә дискыларҙы яҙҙырғанда уҡ ебәрелгән. Әммә үҙенең төп маҡсатын - башҡорт йырҙарын интернетҡа сығарыуҙы сайт уңышлы башҡара.

**Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ.**
**(Дауамы бар).**

ӘҮЛИӘ-ӘҮЛИӘЛЕК



# МӨЖӘҮИР ХӘҘРӘТ -

## башҡорттоң бөйөк әүлиәһе

*Аллаһ теләгән кешеһенә хикмәт бирә, ә кемгә хикмәт бирелгән - уға ҙур изгелек тә бирелгән. Ләкин быны аҡыл эйәләре генә иҫендә тота.*

**("Әл- Бәҡара" сүрәһенең 269-сы аяты).**

**Халкыбыҙҙың оло мөхәббәтен яулаған, халыҡ хәтеренә исеме алтын хәрефтәр менән уйылып яҙылған дин әһеле, әүлиә Сиражетдинов Мөжәүир Уйылдан улы тураһында уйлана башлаһаҡ, бер нәмәгә хайран ҡалабыҙ: уға булған оло ихтирам, уның шәхесе менән ҡыҙыҡһыныу йылдар үткән һайын баҙыҡая, арта бара.**

Ғәҙәттә, киң мәғлүмәт саралары күренекле шәхестәрҙе, халыҡ онотоп китмәһен өсөн, ваҡыт-ваҡыт иҫкә төшөрөп, хәтерҙе яңыртып һәм яҡтыртып тора. Ә Мөжәүир хәҙрәттең исеме бер ниндәй махсус хәтерләүҙәргә мохтаж түгел. Тыуыуына - 133, изге йәне әхирәткә күсеүгә быйыл йәй 42 йыл тулып үтте, ә уның хикмәттәрен, ҡылған яҡшы эштәрен, әйтеп ҡалдырған өгөт-нәсихәттәрен кешеләр телдән төшөрмәй һаман һағынып һөйләй. Дауаханаларҙа ятып, һауыға алмағандар араһында "Һ-ә-ә-эй, Мөжәүир хәҙрәтебеҙ тере булһасы! - тип зар-интизар булыусылар бар.- Бер ихласлап өшкөрөүе ғүмерлеккә етер ине". Уны иле менән юҡһынып, өҙөлөп һағыналар. Бындай хәлде, бөтә халыҡтың бер юлы, түрә-ҡара ҡушмаған көйө, үҙ ихтыяры менән шулай ғәрештәргә күтәреп ҙурлауын, дөрөҫөн әйткәндә, миңә тәүгә осратырға тура килде.

- Мин Ҡөрьән сығам да хәҙрәт олатай рухына бағышлайым, - тине бер осрашҡанда Разия апай. Хәҙрәт рухын шат ҡылыр өсөн Ҡөрьән сығып бағышлауҙары тураһында аҙаҡ та күп кешеләрҙән ишетергә тура килде. Хатта ҡәберенә барып, аҙна буйы ашамай-эсмәй, Ҡөрьән уҡып ултырыусы суфыйҙар менән осрашҡаным булды. Баймаҡ, Хәйбулла, Әбйәлил, Йылайыр яҡтарында, Сибай ҡалаһында әле лә һәр өйҙә, һәр ғаиләлә тиерлек уның исеме менән бәйле яҡты хәтирәләр һаҡлана, уның яҙып биргән бетеүҙәрен, өшкөрөп биргән тоҙон күҙ ҡараһындай күреп һаҡлайҙар. Әүлиәлеге, аҡыл ҡеүәһе, табиплығы менән әҙәм балаһының тән сирен генә түгел, йән сирен дә сихәтләндереү һәләтенә эйә Мөжәүир хәҙрәткә, шулай итеп, халыҡ бөгөн дә алҡышланып рәхмәтен әйтә.

Сиражетдинов Мөжәүир Уйылдан улының (1876 - 1967) бөтә ғүмере Баймаҡ районының "Йылайыр" совхозына ҡараған йәмле Урғаҙа буйындағы Манһыр ауылында үтә. Шунда тыуа, йәшәй, 91 йәшендә гүр эйәһе булып, ошо ауыл зыяратында ерләнә.

Тыуыуына 133 йыл үтеп киткәнлектән, Мөжәүирҙең бала сағы тураһында белеүселәр юҡ кимәлендә. Әммә ил хәтере икһеҙ-сикһеҙ даръя кеүек икән. Телдән-телгә күсеп, быуындан-быуынға тапшырылып, барыбер иң мөһим мәғлүмәттәр беҙҙең көндәргә килеп еткән. Сибай ҡалаһында йәшәүсе, ҡулынан Ҡөрьәнен төшөрмәгән ағинәй Булатова Фирдәүес Шаһимырҙан ҡыҙының күңел түрендә хәҙрәт-олатайҙың бала сағы тураһында бай хәтирәләр һаҡланыуы асыҡланды. Буласаҡ әүлиә Фирдәүес апайҙың әсәһе, ирҙәрсә сая холоҡло, үткер, тәбиғәттән төплө аҡыллы Нәзилә Биишеваны бик ихтирам итә, күп кенә серҙәрен, мәҫәлән, бала сағында күктән өҫтөнә йәйғорҙоң осо төшөү мөғжизәһен, уға һөйләп ҡалдыра. Аҙаҡ хикмәт эйәһенең хикмәттәрен Нәзилә Фирдәүес ҡыҙына бәйән итә. 1887 йылдарҙа, Мөжәүиргә ун бер йәштәр тирәһе булғанда, Манһырға Зәйнулла ишандың килеүе, уны өлөшлө бала тип атауы, Ғабдулла Сәидигә һәм мәҙрәсә тотҡан башҡа хәҙрәттәргә баланы мотлаҡ уҡытырға ҡушыуы тураһында ла ул һөйләп ҡалдыра.

Арабыҙҙан китеүенә байтаҡ йылдар үтеүгә ҡарамаҫтан, Мөжәүир хәҙрәттең артабанғы ғүмер миҙгелдәре тураһында бәйнә-бәйнә һөйләүселәр бихисап. Кәримова Хәҙисә, Ҡәҙерғолова Үлмәҫбикә, халыҡ табибы Байгилдина Нурия, Бүләкова Рәйсә (ҡартәсәһе Көмөшҡолова Гөлъямал хәтирәләрен тергеҙә), Хәбирйәнова Роза, Мәхмүтова Зәйнәп, Иҙрисова Миңлеямал, Иҙрисов Байтүрә, Сиражетдинов Ғәйнулла, Кунаева Гөлдәр, Баймөхәмәтова Разыя, Хәсәнова Фәйрүзә, Туҡаев Мөхәмәтйәр, ирле-ҡатынлы Аширбаевтар һәм башҡа йөҙәрләгән кеше уның тураһындағы яҡты хәтирәләрен күңел түрендә һаҡлай.

Хәҙрәтте яҡындан белгән, хәҙерге ваҡытта Байыш ауылында йәшәгән уның бер туған ҡустыһы Кәримова Хәҙисә Теүәлбай ҡыҙы, "Һүҙҙәрем бер ваҡыт алтын бәрәбәренә булыр әле", тип, йыш ҡабатлауы тураһында хәтерләй, уның бик ярҙамсыл, туған йәнле, әңгәмәсел, асыуланыуҙың ни икәнен белмәгән, алсаҡ, һүҙен үлсәп һөйләргә ятҡан тәрән аҡыл эйәһе булыуын әйтә.

Йәнә Мөжәүир хәҙрәт менән яҡындан аралашҡан, бөгөнгө көндә "Йылайыр" совхозында йәшәүсе Байназарова Зәкиә апай уның төҫ- башын ошолай тасуирлай: "Дәү, мыҡты кәүҙәле, аҡ сырайлы, эс- бауырында ниҙәр ятҡанын үтә күрерҙәй үткер ҡарашлы, йәшкелт-көрән күҙле ине".

Ҡәҙерғолова Үлмәҫбикә апайҙың хәтирәләре айырыуса ҡыҙыҡлы. Хәҙрәткә тәү тапҡыр барыуы тураһында бына нимәләр һөйләй ул.

- Бөтә кеше Мөжәүир хәҙрәттең һәләтлегенә хайран ҡала. Мин дә уға барып килергә булдым. Берҙән-бер һыйырымды һаттым, аҡсаһын хәйерлеккә тип кеҫәмә һалып алдым, Ғәбдинур улымды етәкләнем. Бара торғас, улым арыны, уны күтәреп алдым. Ауылға етеп булмай ҙа ҡуя, хәл бөттө. Әйтәләр ине, хәҙрәттең әбейаты бар тип. Олатай беҙгә шул әбейатын ебәрһә ярар ине, тип киләм. Шул саҡ ҡаршыға бер әбей килеп сыҡты ла улымды елкәһенә ултыртып та алды. Миңә эйәрергә ҡушты. Олатай беҙҙе көләп-шаяртып ҡаршы алып тора: "Һыйыр һынлы һыйыр һатып, аҡсаһын кеҫә тултырып һалып алғас ни, атлауы ауырҙыр шул, - ти. - Арыҡ һыйырҙың күтәне киң, ярлы кешенең күңеле киң. Бер тин дә хәйер, мең тин дә хәйер. Ана, кеҫәң төбөндә ҡыҫылып бер тин ята бит, миңә шуны алып бир". Ҡаушауҙан телһеҙ ҡалғанмын. Кеҫә төбөндәге аҡсаны ала алмайым да ҡуям. Бер саҡ тинлек үҙе иҙәнгә сылтырап барып төштө. Нисек былай булды әле, кеҫәм тишек түгел ине ләһә, тип уйларға ла өлгөрмәнем, олатай тағы көлдө. "Минең хикмәттәремде күрергә тип килгәйнең бит, инде күңелең булдымы? " ти.

Шулай итеп, кешенең ҡайһы юҫыҡтан ни уйлап килерен алдан белеп торған, барыһын үтә күргән хәҙрәт үҙенең күрәҙәлеге, кәрәмәттәре менән Үлмәҫбикәнең һушын ала. Бынан ары яҙмыш уларҙы күп тапҡырҙар осраштыра.

- Туҡһанды ваҡлай башлағайны, мине күрергә теләүен әйтеп ебәргән,- тип хәтерләй инәйебеҙ.- Олатай әйткәнде тыңламаған кеше юҡ беҙҙең яҡта. Барҙым. "Ҡыҙым, - тине,- һин зирәкһең, тапҡыр теллеһең, үткәрә әйтә беләһең, һүҙең үтемле. Дини байрамдарҙа, ҡөрьән аштарында, дуҫ-иш ултырҙаш булған ерҙәрҙә гел мине иҫләп, ҡылған изгелектәрем тураһында һөйләп йөрө, телеңдән дә төшөрмә, йәме. Мине онотмау бигерәк тә дини ҡәрҙәштәремдең үҙҙәре өсөн файҙалы булыр". Эйе, Лоҡман Хәкимдән ҡалышмаған аҡыл, хикмәт эйәһен, әүлиәне, илгә изгелек итеүсе табипты онотһаҡ, доғалар бағышлап, уның рухын шатландырмаһаҡ, беҙгә яҙыҡ булыр ине...

**Лира ЯҠШЫБАЕВА.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН

# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Альфа-кимәлдә алынған һәләт

Мейе тулҡындарының секундына ете-ун дүрт тирбәлеше нимә менән әһәмиәтле? Хәл-торош ҡорбанынан хәл-торошто булдырыусыға әйләндереүе менәнме? Фән был һорауға яуапты күптән түгел генә тапты. Уйлау мәлендә альфа-кимәлдә мейенең уң ярымшары эшләй. Фекерләү һәләте был осраҡта ике тапҡырға артамы? Ниндәйҙер кимәлдә, эйе, әммә был хәҡиҡәттең бәләкәй генә бер өлөшө. Хәҡиҡәт шунда: уң яҡ ярымшар беҙҙе ижади башланғыс менән бәйләй.

Төнгө төш һәм өндәге төш беҙҙе барлыҡ мәғлүмәт, барлыҡ яуаптар, барлыҡ хәл итеүҙәр сығанағы менән бәйләй. Эшҡыуарҙарҙан торған аудиторияға ошоно аңлатып, мин: "Әлегә тиклем һеҙ бизнесығыҙҙы һул яҡ ярымшар ярҙамында төҙөнөгөҙ. Был бер ҡулығыҙҙы арҡағыҙға бәйләп ҡуйыу кеүек", - тинем. Был - ныҡ кесерәйтеү әле. Бары тик һул яҡ ярымшарҙы ҡулланыу ярҙамында күрһәтелгән сикләүҙе сағыштырып булмай.

Мин бөтөн донъя буйынса аң кимәле үҫешенең коэффициенты буйынса ни бары ике процентты тәшкил иткән кешеләрҙе берләштергән "Mensa" йәмғиәте ағзаһы булыр өсөн тест үттем. Үтә алманым. Шул саҡ уң яҡ ярымшар менән идара итергә өйрәтеүсе Сильва ысулы буйынса күнекмәләр үтә башланым. Был юлы еңел генә кәрәкле һөҙөмтә күрһәтеп, йәмғиәт ағзаһы булып киттем.

Эйе, һеҙ аң үҫеше коэффициентын күтәрә алаһығыҙ. Әммә... унан күберәкте лә булдыра алаһығыҙ.

Әгәр һеҙ Аллаһы Тәғәлә кеүек булһағыҙ, нимә эшләр инегеҙ? Әлеге ваҡытта һеҙ тап ошо юлда тораһығыҙ. Был бик ябай, әммә ни өсөндөр быға балалар баҡсаларында, мәктәптәрҙә, университеттарҙа уҡытмайҙар.

Беҙ, ике яҡ ярымшарҙар менән дә эшләүселәр, мәғариф системаһына ышанмайбыҙ. Ул - ниндәйҙер үҙгәрештәргә ҡаршы торған монолит структура. Беҙ фәнгә бер аҙ өмөтләнәбеҙ. Бында ғалим-философтар барыһынан да алдараҡ бара. Ҡалғандар уларҙы йөҙ йәки ике йөҙ йылдан һуң ғына ҡыуып тотор. Әйҙәгеҙ, көтөп тормайыҡ. Әйҙәгеҙ, хәҙер үк уң яҡ ярымшарыбыҙҙы эшләргә мәжбүр итергә тәүге аҙым яһайыҡ.

Беренсе бүлектә һеҙ уңайлы итеп ултырғыста ултырып, күҙҙәрегеҙҙе йомоп һәм өс тапҡыр тәрән итеп тын алып көсһөҙләнергә өйрәндегеҙ. Һеҙ ниндәйҙер тыныс картиналарҙы күҙ алдына килтереп, ыңғай ҡуйылыш ярҙамында мейе компьютерығыҙҙы ҡайтанан программалаштырыуға әҙерләндегеҙ. Был аффирмациялар һеҙҙең фекерләүегеҙҙе ҡайтанан программалаштырҙы, сөнки көсһөҙләнеү һәм визуалләштереү ярҙамында мейегеҙҙең уң яҡ ярымшарын әүҙемләштерҙегеҙ. Ул әүҙем булған һул ярымшарға ҡушылды һәм һеҙҙең өсөн эшләй башланы. Компьютерҙың яртыһын ғына программалаштырып булмаған кеүек, мейене тотош программалаштырырға мөмкин, әммә уның яртыһын ғына түгел.

Хәҙер беҙгә шул уҡ көсһөҙләнеү һәм визуалләштереү процедураһын файҙаланырға кәрәк. Өс тапҡыр тәрән һулыш һәм тыныс картиналар ярҙамында һеҙ ҡабат мейе компьютерығыҙҙы программалаштырасаҡһығыҙ, әммә бер ни тиклем икенсерәк. Һеҙ элекке кеүек үк үҙегеҙгә картиналар төшөрәсәкһегеҙ, маҡсат ҡуясаҡһығыҙ, әммә бер ни тиклем хәйлә менән.

Һеҙгә Ижадсы һәм һеҙҙе бәйләп тороусы кешене күҙ алдына килтерергә кәрәк буласаҡ. Кем ул? Һеҙ уны яҡшы беләһегеҙ, әммә бер ваҡытта ла һөйләшеү мөмкинлегенә эйә булғанығыҙ булманы. Был һеҙҙең Юғары Минегеҙ. Һеҙҙең Юғары Минегеҙ - Ижадсынан фәрештәләр һәм остаз итеп күтәрелгән йән эйәләре ярҙамында кеше аңы аңлай алмаған каналдар буйынса беҙгә килеүсе бойороҡтоң беренсе сынйыры. Үҙегеҙҙең Юғары Минегеҙҙе күҙаллап, һеҙ ошо каналдар буйынса Ижадсының ярҙамын алырға әҙер булыуығыҙҙы күрһәтәһегеҙ.

Хатта ниндәйҙер дин тотһағыҙ ҙа, дини эшмәкәрлегегеҙҙе интеллектуаль, һул яҡ ярымшар эшмәкәрлеге менән генә сикләгәнһегеҙ. Әммә уң яҡ ярымшарҙың эшләй башлауы нисек барыһын да үҙгәртә! Һеҙгә динегеҙҙән баш тартырға кәрәкмәй, киреһенсә, хәҙер һеҙ ул биргән барлыҡ байлыҡты ла ҡабул итеп ала алаһығыҙ. Быға тиклем динегеҙ байлыҡ һәм һөйөү килтерҙеме? Хәҙер иһә килтерәсәк.

**Роберт СТОУН.**



## 25 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Жить здорово!"
10.20 "Контрольная закупка"
11.00 "ЖКХ". Как добиться того, на что мы имеем право?
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
